✓ "Киске Өфө"гә 2010 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән икенсе ярты йыллыҡҡа яҙыла башларға ла була. Индекс - 50665, хаҡы - 306 һум 84 тин. Беренсе ярты йыллыҡта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 мартҡа тиклем яҙылһа, "Киске Өфө"нө апрелдән алдыра башлаясаҡ. Ҡыҫҡаһы... Берҙә булайыҡ, берҙә уйлайыҡ, берҙә-берҙә фекер ҡорайыҡ!




ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6 - 12 МАРТ (БУРАНАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru    2002 йылдан башлап сыға    Һатыуҙа хаҡы ирекле    №10 (376)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бишбармаҡ ашарға...**

Әбйәлилгә килегеҙ!



2

**Илһөйәр бул,**

тик үҙ донъяңда ғына ҡайнама



6

**Ҡыҙ балаҡай тыуһа, бәхете булһын,**

бәхете булмаһа... тыумаһын



8-9

**Ҡоҙағыйҙар мөнәсәбәте...**





12 ихласлыҡтан ярала

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Кәләш һайлаған егеттәргә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?

*Сәйфулла ӘМИРОВ, журналист:*

Был донъяла һәр кемдең үҙенә тәғәйен маҡсаты була: кемдер ғалим була, асыш яһай, икенселәр ниндәйҙер ҡоролмалар уйлап сығара, башҡалар ер эшкәртә, заводта эшләй һ.б. Шул уҡ ваҡытта ир-егеттәрҙең һәм ҡатын-ҡыҙҙың барыһы өсөн дә уртаҡ бер бурыс бар, һәм ул үҙ нәҫелендә ҡалдырыуҙан ғибәрәт. Элегерәк туғыҙ егеткә ун ҡыҙ тура килеүе тураһында бер йыр бар ине: егеттәргә кәләш һайлау иркенерәк булған, йәнәһе. Бөгөн, киреһенсә, ауылдарыбыҙҙа егеттәр өйләнә алмай интегә. Буш ҡалмайым, тиһән, иртәрәк өйләнеү фарыз хәҙер. Йәш үтә барған һайын, кәләш һайлау мөмкинлеге тарая бара, унан һуң, оло йәштәге егеттәр артыҡ талапсан булып, һайлана башлай. Хәҙер әрмегә лә 18 йәштән алалар бит, көсөн ташып барған, дыуамалыраҡ ваҡытта өйләнеп ҡалыуың хәйерлерәк. Йәш ғаилә үҙен-үҙе тәрбиәләү ҡеүәһенә эйә, ғаилә ҡорған йәш ир-егет тә кәләшенең ыңғай йоғонтоһо аҫтында үҙ аллы ысын ир-ат ҡорона тиҙерәк инә. Еңгәйҙәребеҙгә бер килке үпкә белдереү кәрәк: элек-электән ҡәйнештәргә хәләл ефет табышып, йәштәрҙе йәрәштереү бурысын улар теүәл үтәгән бит. Егеттәр, ә һеҙгә кәңәш рәүешендә олатайҙар һүҙен еткерәм: "Олатайым ат бирҙе, әйәрлә лә сап, тине. Сибәр генә ҡыҙ күрһәң, ҡосаҡла ла ят, тине", үәт!

*Салауат КИЛДИН, хеҙмәткәр:*

Башҡорт егеттәре башҡорт ҡыҙҙарына өйләнергә тейеш, һәм быны теүәл үтәләргә тейеш ҡанун итеп ҡабул итергә кәрәк. Ни өсөн? Беренсенән, һәр бер халыҡтың этник асылын билдәләүсе гендарҙы ҡатын-ҡыҙ һаҡлай, һәм улар ошо милли генофонд мәғлүмәттәрен быуындан-быуынға тапшыра килә. Гендар тураһында белмәһәләр ҙә, башҡорттар үҙ тоҡомонон, үҙ нәҫеленең көсҡеүәте ҡатын-ҡыҙҙа һаҡланғанын белгән. Ырыу-ара никахҡа инеү ҡануны халҡыбыҙҙың ҡеүәтле генетик, йәғни тұл потенциалын күп быуаттар буйына һаҡлап ҡалыу өсөн төп шарт булып тора. Әсәй-инәйҙәр, оләсәй-нәнәйҙәр культы, уларҙың тәрбиәүи йоғонтоһо үтә көслө булған. Икенсенән, өйләнергә ниәт иткән егет үҙен үҙ ерендә ныҡ баҫып тороусы хужа итеп иҫәпләүе мөһим. Ғаилә ҡораһың икән, ҡатын-ҡыҙға ауырлыҡ һалмау тураһында ҡайғыртыу кәрәк. Ата-бабаларыбыҙҙың ҡатындарына ҡул тейҙереү түгел, ауыр һүҙ ҙә әйтмәүен онотмаһын ине егеттәребеҙ. Үҙ балаларына физик һәм рухи ҡеүәт биреүсе ҡатын-ҡыҙҙың ир-ат ағынан ҡурсаулы булыуы шарт. Ғаиләнең киләсәге, тоторо̆ҡлоғо ир-егеттең уңышлы булыуынан тора, ә бының өсөн маҡсатлы йәшәй белеү фарыз. Ирмен тигән ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр, тигән боронғолар. Халыҡ аҡылы егет кешенең ҡыйыулығын, йәшлек дәртен, көс-ҡеүәтен, алға, ҙур маҡсаттарға ынтылып йәшәүен хуплай. Бындай егеттәргә ҡыҙҙар үҙҙәре үк күҙ йомоп тигәндәй сығырға әҙер. Әйткәндәй, малайҙарҙы көслө, етеҙ, ынтылышлы, булдыҡлы, рухлы, ғаиләһе өсөн ҡалҡан булырҙай итеп тәрбиәләү кәрәклегенә лә ишара ул әлеге мәҡәл. Минең ҡулымдан барыһы ла килә, тип йәшәгән егеттәребеҙ күберәк булһа, ҡыҙҙарыбыҙ сит-ятҡа күҙ ҙә һалып бармаҫ ине.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

ҠЫҘ-ҠАТЫНДАР ЙӘМЕ

# КӨМӨШ ЙӨҘӨК - ҠУЛ КҮРКЕ,

## нағышлы һаҡал - түш күрке

**Беҙҙең халыҡ борон-борондан көмөшкә өҫтөнлөк биргән, милли кейемдәребеҙҙе байытыусы тәңкәләр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың биҙәүес әйберҙәре лә күпселек көмөштән яһалыуын ишетә белһәк тә, уларҙың төрҙәре, мәғәнәһе, серле хикмәте тураһында бик үк белеп бөтмәйбеҙ. БР Милли музейҙың этнография бүлеге хеҙмәткәрҙәре Башҡортостан, сит өлкәләр буйлап ғилми экспедициялар ваҡытында йыйылған көмөш биҙәүестәрҙең ысын өлгөләренән торған бик бай фонд туплауға өлгәшкән. Һәм ошо боронғо хазиналарыбыҙҙы халыҡҡа күрһәтеү маҡсатында музейҙа "Алтындан тик көмөш кенә матурыраҡ" тигән көмөш биҙәүестәр күргәҙмәһе ойошторолған. Күргәҙмә менән яҡынданыраҡ танышҡандан һуң, ундағы өлгөләр тураһында БР Милли музейының этнография бүлеге мөдире Эльвира Хәмиҙуллина менән әңгәмәләшеп алдыҡ. Был әңгәмәне тарих фәндәре кандидаты Светлана Шитованың "Башҡорт халыҡ кейеме" тигән китабынан алынған мәғлүмәттәр менән дә тулыландырҙыҡ. Ғөмүмән, был теманы гәзитебеҙ биттәрендә артабан да дауам итергә теләр инек. Райондарҙа, ауылдарҙа башҡорт кейеме тураһында күп мәғлүмәт һаҡлаған апайҙар, инәйҙәр бар, уларҙан хаттар көтәбеҙ. Хәҙергә ошондай дөйөм мәғлүмәттәр менән танышa торайыҡ.**



Дауамы 11-се биттә.

СӘЙЛӘҮ ГӘБЕ

**Бишбармаҡты шартына килтереп Әбйәлилдә генә бешерәләрҙер ул. Йортҡа иң ҡәҙерле ҡунаҡ килгәндә лә бишбармаҡ менән хөрмәтләй был төбәк ҡатын-ҡыҙҙары, бишбармаҡ бешереүҙең үҙенә генә хас нескәлектәрен дә, был милли аҙыҡ төрөнә бәйле үтәлгән йолаларҙы ла улар гел хәтерендә тота һәм уларҙың боҙолоуына йәки онотолоуға юл ҡуймай. Шуға ла был юлы "Сәйләү гәбе" рубрикаһының байрам өҫтәле артына Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылында йәшәүсе апайҙарҙы - Нәфисә МӘҒӘСҮМОВА, Рита ШӘЙҘУЛЛИНА, Сания ҠОРМАНАЕВАны саҡырҙыҡ. Улар менән бишбармаҡ бешерергә лә өйрәнербеҙ, башҡа милли аш-һыу төрҙәре әҙерләү серҙәренә лә төшөнөрбөҙ.**

# БИШБАРМАҠ АШАРҒА...

## Әбйәлилгә килегеҙ!



**➚ Бишбармаҡтың тап боронғоса оҫталары һеҙ, Әбйәлил ҡатын-ҡыҙҙары тип иҫәпләйбеҙ. Шуға ла, әйҙәгеҙ, был милли ризығыбыҙҙы бешереүҙең үҙенсәлектәре, ысын бишбармаҡ ниндәй булырға тейеш икәнлеге тураһында һөйләшеп алайыҡ...**

**Сания апай:** Бишбармаҡ өйҙә иң хөрмәтле аш һанала, һуғым һуйғас, ҡышҡы оҙон кистәрҙә балаларыңа ла эшләп ашатаһың. Ул көн табын байрамса төҫ ала.

**Нәфисә апай:** Бишбармаҡ өсөн һимеҙерәк ит алаһың. Ғәҙәттә, һыйыр итенә ҡош ите лә ҡушып ебәрһәң, һурпа тәмлерәк килеп сыға. Йәйен бишбармаҡты һарыҡ итенән бешерәләр, йылҡы һуйған йылды йылҡы итенән генә әҙерләнә был ризыҡ.

**Рита апай:** Ит ҡайнап сыҡҡас, туртаһын һыпырырға ла була, йәғни аш сүмесе менән һурпаны болғатып, күбеген яҙаһың, ул саҡта иттең туртаһы һауыттың ситенә ултыра. Хәҙер күптәр туртаны һөҙөп ала, һурпа ла буръяҡланып тормай, үтә күренмәле генә була.

**Нәфисә апай:** Атайым колхоз рәйесе булғас, төрлө түрә-ҡара күп килер ине. Уларҙы ашатырға кәрәк бит инде. Атайымдар йыйылыш үткәрергә клубҡа киткәндә әсәйем ит һалып ҡала. Зиннәтлерәк ҡунаҡҡа ҡош ите бешерәһең. Ит ҡайнап сыҡҡас та һалма йәйеп, ҡаҙандың тимер ҡапҡасы өҫтөнә киптерергә һала. Шулай итеп, йыйылыш бөтөүгә, бишбармаҡ әҙер ҙә була. Өләсәйем, уның һеңлеләре аш-һыуға ла оҫта, бик сәсән телле лә ине. Әсәйем ҡунаҡҡа бишбармаҡ әҙерләгән саҡта: "Бутыр-бутыр бутҡа бешә, килгән ҡунаҡ беҙгә төшә. Беҙгә төшмәй кемгә төшһөн, беҙҙең бутҡа майға бешә", - тип һамаҡлап ултыра торғайны. Партия заманында ла килгән-киткән кешене бишбармаҡ менәй һыйлай инек.

Әбйәлилдең тамъян ырыуы яҡтары һалманы ваҡ ҡына итеп дүрткелләп ҡырҡа, беҙҙә ғәҙәти туҡмас кеүек киҫәләр. Баймаҡ, Сибай яҡтарында ла бишбармаҡҡа һалманы дүрткелләп ҡырҡалар. Ундай һалманы һалғас та, эргәһенән китмәй болғап торорға кәрәк, сөнки ул бер-береһенә йәбешеп бара, ә беҙҙең туҡмасты бер-ике болғаһаң да етә. Уны әллә ни нәҙек тә, ҡалын да итмәйһең. Алдан киптереп, ҡырҡып ҡуйһаң да ярай, тик һалма һаҡланған муҡса сепрәктән булһын, шул саҡта ул боҙолмай оҙай һаҡлана.

Әле лә һабантуйҙарҙа, төрлө йыйындарҙа төрлө аш-һыу бешереп, оҫталығыбыҙҙы күрһәтеп ярышабыҙ. Бындай ярыштар шуныһы менән дә әһәмиәтле: боронғо аш-һыуҙар тергеҙелеү менән бер рәттән, бер-берендән өйрәнеп тә ҡайтаһың, бер үк аш-һыуҙың төрлөсә исемдәрен отаһың.

**Рита апай:** Бешеп сыҡҡан итте алыр алдынан һурпа өҫтөндәге һөҙлөгөн айырым һауытҡа йыйып алаһың. Күбәләктәр уны "һөҙлөк" тип йөрөтә, тамъян яҡтары "тоҙлоҡ", ти. Итте һоҫоп алғас, һурпаны һарҡытабыҙ, йәки икенсе һауытҡа яй ғына итеп ҡоябыҙ. Туртаһы, һөйәктәре ит бешкән кәстрүлдең төбөндә ҡала. Әгәр ҙә итең һөйәклерәк булып тойолһа, һурпаны иләк аша һөҙөргә кәрәк. Ваҡ ҡына итеп туралған һуғанды тоҙлоҡҡа һалып, йомшарһын өсөн бер аҙ ҡайнатып алаһың.

Ҡайһы бер хужабикәләр, тәмен ала, тип, бишбармаҡҡа картуф ҡушмай. Әммә беҙҙең яҡта картуфты ваҡ итеп шаҡмаҡлап ҡырҡып һалалар. Картуф ҡайнап сығыу менән һалмаһын төшөрәһең. Ҡунаҡтарың иҫәбенә ҡарап, бер кешегә бер ҡуш ус һалма һалаһың. Болғата-болғата бешереп алғас, ҙур табаҡҡа, беҙҙең яҡта уны алдыр тиҙәр, һалманы һөҙөп һалып, өҫтөнә ваҡ итеп туралған ит, ит өҫтөнә тоҙлоҡ ҡойоп, табынға бирәһең. Һурпаһына ҡорот төшөрәһең дә, бишбармаҡ ашалғансы, ҡапҡас менән ябып ҡуяһың. Аҙаҡтан һауыттарға һалып, ҡунаҡтарыңа эсерәһең.

**Нәфисә апай:** Борон бишбармаҡты ҡул менән тотоп ашағандар, исеме лә шунан килеп сыҡҡан. Ҡаҙаҡтар бөгөнгө көндә лә шулай итеп ашай, тиҙәр. Тамъян яҡтары бишбармаҡ һалып ашау өсөн кәсә бирә, әммә беҙҙең яҡта ундай ғәҙәт юҡ. Беҙ өҫтәл уртаһына бишбармаҡты алдыры менән ҡуябыҙ ҙа, ағас ҡалаҡтар менән ашайбыҙ. Ағас ҡалаҡ булмаһа, ябайы ла ярай. Бер саҡ йәштәр, йола боҙоп, бишбармаҡты тәрилкәгә һалып бирә башлағайны, өлкәндәрҙең тәнҡитенән һуң туҡтаттылар.

**➚ Ҡунағыңды бишбармаҡ менән һыйлау өсөн һыуытҡыһында мотлаҡ ҡоротоң да булырға тейештер инде?**

**Рита апай:** Ауылда йәшәп, ҡорот та эшләп ашамаған кешеләргә аптырайым мин. Көн һайын һыйырыңды һауаһың, һөтөн айыртаһың. Айыртылған һөттө ҡатыҡ итеп ҡайнатаһың да, бер ҙур ғына һауытҡа йыйып бараһың. Ҡатыҡты күбәләк ырыуыныҡылар "ойотҡан" тип йөрөтә. Ҡатыҡ ныҡ итеп әсергә тейеш, уның өҫтөнә ҡалҡҡан һыуын алып, түгеп тораһың. Ул әсеп сыҡҡас, ҡайнатаһың. Ҡатыҡты оҙағыраҡ ҡайнатһаң -ҡорото һары, ҡайнап сығыу менән эшләһәң аҡһыл ғына килеп сыға. Ҡайһы кеше ҡайнар-ҡайнамаҫтан алып, ҡоротто шыйығыраҡ итеп яһай. Шыйыҡ ҡоротто оҙағыраҡ һаҡлайым, тиһәң, тоҙ һалып, быяла һауытҡа һалаһың да, һалҡынсараҡ урынға ултыртаһың. Бер биҙрәнән ярты биҙрә ҡорот сыға, шуға бер ус самаһы тоҙ һалһаң, етә. Башлы ҡорот яһағанда ҡайнатылған эркетте сепрәк тоҡсайға һалып һырҡытаһың да, үҙеңә кәрәкле ҙурлыҡта йомарлап алаһың. Ыҫланған ҡорот әҙерләү өсөн йомарланған ҡоротто талдан үреп яһалған ялғашҡа һалып, кипкәнсе усаҡ төтөнөндә тотаһың. Ҡышын кипкән ҡоротҡа һыу һалып, иҙеп алаһың. Бик файҙалы ла, тәмле лә.

**➚ Нәфисә апай, һеҙ тултырманы ла үҙегеҙсә генә итеп эшләйһегеҙ икән. Гәзит уҡыусыларға уны эшләү тәртибе менән уртаҡлашмаҫһығыҙмы?**

**Нәфисә апай:** Тултырманы ла борон икенсе төрлө итеп эшләй инеләр шул. Беҙҙең өйҙә ағас орооһонан эшләнгән оро табаҡ бар ине. Малды һуйғас та, бауыр-үпкәһен, йөрәген ошо табаҡҡа һалып, майһыҙыраҡ булһа, малдың эс майын өҫтәп ебәреп, тимер тәпке менән ваҡ итеп турай торғайнылар. Хәҙер анһатҡа һалыштыҡ шул, бындай ҡатышманы ит турағыстан ғына үткәрәбеҙ ҙә ҡуябыҙ, тик ул тултырма түгел, колбаса һымаҡ килеп сыға. Ә борон яһалған тултырма үҙенең һутында ғына бешкәс, һутлы була. Уға һуған турайһың, ярма ла ҡушалар. Тултырма тиҙ бешә, бешкәндә һытылып китмәһен өсөн бушағыраҡ тултыраһың, бешергәндә ҡайнап сыҡҡас, энә менән өс урындан тишәһең.

**Рита апай:** Тары ярмаһы тиҙ бешә, файҙалы ла, шуға тултырмаға тары ярмаһы ҡушырға була. Элек ҡан ҡатыштырғандарын да хәтерләйем, малды салған саҡта тултырмаға тип махсус һауытҡа ҡан алдыра ине өләсәйем. Ҡарындағы талаҡты ҡушһаң да йомшаҡ була.

**(Дауамы 16-сы биттә).**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов һәм БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Өфөнөң Спорт һарайында эшләгән "Агрокомплекс - 2010" XX махсуслаштырылған күргәҙмәһен ҡараны. Күргәҙмәлә Рәсәйҙең 25 төбәгенән, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән 180 предприятие үҙҙәре етештергән ауыл хужалығы техникаһы һәм башҡа тауарҙар, аҙыҡ-түлек менән таныштыра.

✓ БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы 2010 йылдың 27 февралендәге бойороғо менән РФ Дәүләт Думаһы депутаты Андрей Назаровҡа бирелгән юғары профессиональ белем тураһындағы 0470679 һанлы дипломды ғәмәлгә яраҡһыҙ тип, билдәләне. Ошо уҡ бойороҡ менән вуздың дәүләт аттестацияһы комиссияһының А. Назаровҡа "менеджер" квалификацияһы тапшырыу тураһындағы ҡарары ла яраҡһыҙ, тип табылды.

✓ Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Владимир Путин РФ Хөкүмәтенең 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙы үткәреү буйынса комиссияһын ойоштороу тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Уға РФ Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Сергей Собянин етәкселек итәсәк. Башҡортостанда БР территорияһында халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса республика Хөкүмәте ҡарамағындағы комиссия 2008 йылдың июлендә ойошторолдо. Уға БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев етәкселек итә.

✓ БР буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, барлығы 25 кеше телефон аферистары ҡорбаны булған. Енәйәтселәр шундай схема буйынса эш иткән: өй телефонына улы йә ире булып бер ир шылтырата һәм әле генә машинаһы менән кеше тапатыуы тураһында хәбәр итә. Шунан ул телефонды, йәнәһе, милиционерға тапшыра. Уныһы мәсьәләне билдәле бер суммаға хәл итеп була, тип аңлата. Өйгә курьер килә һәм баяғы аталған сумманы алып китә. Баш ҡала милиционерҙары ике осраҡта енәйәтсене тотҡан һәм зыян күреүселәргә 18 мең һәм 20 мең һумды ҡайтарып биргән.

✓ Нефтекама ҡалаһында башҡорт һәм татар йырҙарын башҡарыусыларҙың "Дуҫлыҡ моңо" халыҡ-ара конкурсы үтә. Ике йылға бер тапҡыр үткәрелгән был мәҙәни сараның һайлап алыу туры 10 мартта ойошторола.

✔ *Канаданың да артына типтек беҙ. Бронза миҙалдар һаны буйынса. Улар, анна, алтынды йыйыусылар ҙа йыйғандар. Ә бронзаны ни бары бишәү генә алғандар. Оят түгелме икән уларға?*

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ЕҢЕҮСЕНЕҢ ТУҒАНЫ КҮП, ЕҢЕЛЕҮСЕ ГЕНӘ ЕТЕМ,

## йәки 2014 йылда Сочиҙа беҙҙе ни көтә?

**8 март уңайы менән был күҙәтеүҙе заман ҡатын-ҡыҙҙарының спортҡа, спортҡа түгелгән аҡсаға, спортсыларға, Олимпиадалағы уңыштарыбыҙға ҡараштарын күҙалларға маташыу, тип аңларға кәрәк. Хәйер, гүзәл заттарҙың теге йәки был мәсьәлә буйынса ни уйлағанын һәм, иң мөһиме, ни өсөн тап ошо фекергә килеүҙәрен ҡасан да булһа белеп, аңлап, төшөнөп булыр микән? Ә шулай ҙа... ҡатын-ҡыҙҙарҙың уй-фекерҙәрен аңларға тырышып, аш бүлмәһендә һауыт-һаба йыуып йөрөгәндә, хәләл ефетемдең түҙыныуҙарын шым ғына ҡағыҙға төшөрөргә булдым әле мин (Автор).**




– Ентелдек! Оят! Мәсхәрә! Ҡайҙа бара беҙҙең спорт? Илебеҙҙең абруйына төкөрҙөләр. Ил нимә ул, ил черт с ним! Минең күнелгә төкөрҙөләр! (Эргәһендә ултырған иренә әйләнә һалып.) Ә һин бында нимә ҡарап ултыраһың? (Әс-с-с-е тауыш менән). Нимә эшләйем һуң, тиһеңме? Эй-й-й-й! Нимә булһа ла эшлә! Беҙҙекеләр Олимпиаданан оятҡа ҡалып ҡайтып баралар... Ә был "Нимә эшләйем һуң?" - тип, минә упайып ҡарап тик ултыра. Эшең юҡмы? Эшең булмаһа, бар барып һауыт-һабаны йыуып кил.

Ул хәтлем оятҡа ҡалған юҡ ине әле. Бер ҡайҙа ла барып булмай бит инде хәҙер. Быйыл йәй Европаға ял итергә барырмын, Адриатик диңгеҙ яры буйында ҡыҙынырмын, тип уйлағайным. Барҙың бармай! Словактар күҙҙе астырмай көлләр инде хәҙер. Беҙҙең хоккейсыларҙы күрге лә килмәй, күрә тороп ҡапҡаларына гол индерәләр ҙә гол индерәләр. Әллә ҡапҡаларҙы бутап йөрөйҙәр инде? Уларҙың бисәләре урынында булһаммы... Кәмендә өс айға... ҡаты диетаға ултыртып ҡуйыр инем мин уларҙы. Әйҙә, йөрөһөндәр, ас көйөнә, шайбаларын шалтыратып, сәкәндәрен болғап, холҡһоҙҙар.

Ә митрополит... Сиркәүгә йыйып алып, суҡындырып тороп оҙатҡан һымаҡ ине. Әллә суҡындырып фатиха бирҙе, әллә буласаҡ еңеүҙәребеҙгә арҡыс-торҡос тәре ҡуйҙы инде?

Журналистар хаҡында әйтергә лә түгел. Әллә нәмә аҙалар таҡы? Йәнәһе, элекке уңыштарыбыҙҙы аяҡ астына һалып тапаныҡ. Ҡасан булған ул "уңыштар"? Совет заманындамы? Совет осоронда балаларҙың өҫтөнә кейҙерерлек кейем булманы. Олимпиадаларҙа еңеп тороп, ярым ялангас йөрөүҙән ни файҙа? Әйҙәгеҙ, улай булғас, киренән СССР-ға ҡайтайыҡ һуң?

Миҙалдарҙы иҫәпләүҙәре бигерәк йәнде көйҙөрә. Йәнәһе, өс кенә алтын, биш кенә бронза, ете генә көмөш. Йәнәһе, Олимпиадаға Рәсәйҙән барған 179 спортсыға ун биш миҙал бигерәк әҙ. Һанай белмәйҙәр. Спортсыларҙың эргәһендә кәмендә бер тренер, тағы ла массажсы, тағы ла врач, тағы ла команда етәксеһе, спорт федерациялары башлыҡтары, Милли Олимпия комитеты етәкселәре, Рәсәй Федерацияһының физик культура, спорт һәм туризм министры һәм уның хеҙмәткәрҙәре. Ә уларҙан тыш тағы ла Ванкуверҙағы "Урыҫ йорто"нда илебеҙҙең ҡаҙаныштарын күрһәтеү, спортсыларҙың рухын күтәреү өсөн йыйылған артистәр, йырсылар, бейеүселәр, юмор оҫталары һәм башҡалар, һәм башҡалар. Уларҙы ҡайҙа ҡуябыҙ? Ә беҙҙе нишләтергә? Беҙ бит бында көн тимәй, төн тимәй, улар өсөн яндыҡ, көйҙөк, бөтөрөндөк. Беҙҙекеләр ҡасан еңә, тип, телевизор алдында көтөп ултырып, духовкала бер ҡаҙҙы яндырҙыҡ, плитәлә өс литр һөтөм "касып" китте. Хәләлем менән аралар боҙолдо. Инде аҙна буйына бер-беребеҙгә ҡараған да юҡ. Телевизорға ғына текләп тик ултырабыҙ. Әйткәндәй, ҡайҙа әле ул? (Иренә өндәшә.) Йәнем, йәнем тим! Ҡайҙа булдың әле һин? Кил эргәмә, кил, йәрәккәйем! Һин дә беҙҙекеләр өсөн көйәһеңме әллә? Ә? У-у-й! Өндәшмәй был. Үҙе менән берәй нәмә эшләп ҡуймаһын. Бигерәк хисле бит ул, йәнекәйем. Бауырҡайым, кил бында. Мөйөштә бер көньяҡ эсемлеге ултыра ине. Ҡана үҙеңә бер тамсы ғына ҡойоп бирәйемсе. Ә? Ҡайҙаһың? Һауыт-һаба йыуам, тиһеңме? Ә, ярар, улай булғас. Йыу, бәпкәм, йыу. Ана бит, ҡалай маладис, нервыларын тынысландырыр әмәл тапҡан да баһа. Маладис та инде. (Тағы ла иренә) Бәпкә-әм! Һауыт-һабаны ҡоротоп ҡуйҙаҡ, ванналағы ебетелгән керҙе лә сайҡап ал әле, йәме. Олимпиада башланыр алдынан ғына һалғайным, шуны никак сайып алып булмай. Телевизор ҡарап тик ултырыла.

Әй-й-й! Беҙҙекеләрҙе әйтәм инде, миҙалдарҙы һанай ҙа белмәйҙәр. Ни бары ун биш миҙал тип ебәрәләр. Ул бит ни бары түгел, ә ун биш! Алтын миҙалдар һаны буйынса ғына еңеүселәр исемлеген төҙөгәндәр, имеш. Уларҙы бит икенсерәк итеп һанап та була. Мәҫәлән, беҙ Көньяҡ Кореянан бер миҙалға алдараҡ. Улар ни бары 14 миҙал ғына алған. Дөрөҫ, уларҙың алтындары беҙҙекенән ике тапҡырға күберәк (6 дана). Әммә бронзаларҙы беҙҙекенә ҡарағанда өс тапҡырға аҙыраҡ. Канаданың да артына типтек беҙ. Бронза миҙалдар һаны буйынса. Улар, анна, алтынды йыйыусылар ҙа йыйғандар. Ә бронзаны ни бары бишәү генә алғандар. Оят түгелме икән уларға? Хужа булып, шуға ла эшкинмәгәс? Швейцария халҡы ҡыуанған була. Алты алтын менән алтынсы урынды яуланыҡ, тип маһаялар. Беҙҙекеләр уларҙы көмөш миҙалдар буйынса биш тапҡырға, ә бронза буйынса ике тапҡырға уҙып китте. Шуны белмәйҙәр. Биш алтын менән етенсе урындағы Ҡытайҙы ла артта ҡалдырҙыҡ (уларҙың ике генә көмөш һәм дүрт бронза). Биш алтынлы Швецияны ла, дүртәр алтыны булған Австрия менән Нидерландтарҙың да артына типтек. Беҙҙең көмөштәребеҙ һәм бронзаларыбыҙ барыбер күберәк.

Ә дөйөм миҙалдар һаны буйынса беҙ барыбер алтынсылабыҙ. Алтынсы - ул ун беренсе түгел. (Ирен иҫенә төшөрә). Ҡара әле, йомороҡасым, керҙе йыуып алып өлгәс, сәй ҡуй әле. Икеүләшеп кенә ултырып берберебеҙгә ҡараша-ҡараша тәмләп кенә сәй эсеп алырбыҙ, йәме? Нимә тиһең? Көньяҡ, тиһеңме? Ул ниндәй көньяҡ тағы? (Йөҙөнә аптырау ғәләмәте сыға) Минме? Һинме? Ҡуй, булмаҫ, яңылыш ишеткәнһеңдер. Юҡ миндә көньяғы ла, төньяғы ла. Вәренйәләп сәй генә бар. Тик вәренйәнең былтырғыһын ғына, элекке йылғыһын ҡарап ас. Как белмәй? Иң мөйөштә ултырған ун өс банка элекке йылғыһы ла баһа! Ҡара әле, вәренйәне иҫкә төшөргәс, башҡа бер уй килде лә баһа. Судьялар дүртенсе урында булыусы спортсыларҙы иҫәпкә алмайынса хәрт итә. Өсөнсө урынға саҡ ҡына етмәгән беҙҙекеләрҙе һанай башлаһаҡмы? Беренсе түгел, нулевой урынға сыҡыр инек.

Ә, бәлки, был махсус рәүештә алдан уйланылған бер пландыр? (Иренә өндәшә). Ҡара әле, ҡорһаҡҡайым, беҙҙекеләр буштан-бушҡа еңелеп торғандарҙан түгел дә баһа. Шулай бит? Был алдан уйлап, берәй маҡсат менән әҙерләп ҡуйылған эштер, моғайын. Бәлки, беҙҙекеләр Сочиҙа миҙалдарҙың барыһын да алыр өсөн Ванкуверға көсләләрҙе түгел, ә еңелелпе генә спортсыларҙы оҙатҡандыр, ә? Улай булғас, нишләп Мутко, Олимпиадаға иң кеүәтле 179 спортсыны алып барҙыҡ, тип белдерҙе икән? Аңланым. Дошмандарҙың күҙен бәйләр өсөн. Бәлки, кирелһенсәлер? Беҙҙекеләр Сочиҙа тағы ла әҙерәк миҙал алһа, Рәсәй спортсылары Ванкуверҙа һәйбәт сығыш яһағандар икән, тип әйтергә мөмкин буласаҡ. Ҙур нәмә алыҫтан күренә, тиҙәр бит. 2014 йылда беҙ Ванкувер ояты өсөн спортсыларыбыҙҙы юҡҡа һүккәнбеҙ, тиергә буласаҡ. Ана бит, беҙҙекеләр ҡалай шәптәр, алдан уйлап ҡуйғандар.

Юҡ, былай булмай. Әҙерләнергә кәрәк, бәрәскәйем. Сочиға алдан, бөгөндән үк әҙерләнә башларға кәрәк. Нисек, тиһеңме? Беренсенән, беҙҙекеләрҙең танау аҫтарынан алтын, көмөш һәм бронза миҙалдарын алып киткән сит ил спортсыларының кемдең аяҡ, кемдең ҡулдарын һындыра һуғып бөтөргә кәрәк. Улай ярамай, тиһеңме? Ә беҙҙең миҙалдарҙы алып китергә яраймы? Илебеҙҙең абруйын төшөрөргә яраймы? Шулай булғас, шым. Мин уйлайым. Был эште кемгә ҡушырға, тип уйлап ултырам. Мәҫәлән, именлек хеҙмәтенең сит илдәрҙә, моғайын, шпиондары барҙыр. Әйҙә, үҙ халҡы менән булышҡансы, шунда сит ил спортсылары менән булышһындар.

Тағы ла... Тағы ла беҙҙекеләргә айырым Олимпиада үткәрергә була. Сочиҙа, әйҙә, бөтә донъя этешеп-төртөшөп ярышҡан булһын. Ә беҙҙекеләрҙе матур ғына, тыныс ҡына итеп икенсе берәй мөйөшкә алып барырға. Әйтәйек, Куршевелгә. Йәки Абҙаҡҡа. Йәки Алтайға. Әйҙә, үҙ һыңғайҙарына йөрөһөндәр ярышып. Ҡабаланмай ғына тауҙан шыуһындар. Тоҫҡап ҡына атһындар. Ә Плющенко хыт биш тапҡыр, хыт алты тапҡыр әйләнһен. Арттарынан берәү ҙә ҡыуып йөрөмәнен. Алтындары ла үҙҙәренә булыр, көмөштәре лә. Бронзалары хаҡында әйтеп торорға ла түгел.

Бүлтәскәйем, Пьер Кубертенды беләһеңме? Белмәйһеңме ни? Әйтәйемме, ул нимә тип әйткән? "Олимпиадала иң мөһиме еңеү түгел, ә ҡатнашыу", - тигән. Беҙҙекеләр башҡаларҙан айырмалы рәүештә Олимпия принциптарына һаман тоғро. Бер нәмәгә ҡарамаҫтан. Дәүләт уларҙы әҙерләүгә, ашатыу-эсереүгә, кейендереүгә миллионлаған, миллиардлаған доллар аҡса түкһә лә. Миҙалдар өсөн муллап премия вәғәҙә итһә лә. Беҙҙекеләр ныҡ тоғро ул, ялтыр башҡайым.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ТӨРКСОЙ-ҙың быйылғы йылды Әхмәтзәки Вәлиди йылы тип иғлан итеүе тураһында хәбәрҙарһығыҙ инде. Ошо йыл саралары сиктәрендә Ҡаҙағстандың Алма-Аты ҡалаһында Әхмәтзәки Вәлиди Туғанға арналған түңәрәк өҫтәл һөйләшеүҙәре ойоштороласаҡ. Унда Вәлидизәң улы Субидәй Туғандың ҡатнашыуы көтөлә.

✔Башҡорт бейеүҙәрен башҡарыусыларҙың "Байыҡ" республика телевизион конкурсы өсөнсө тапҡырға старт алды. Булып үткән беренсе турҙа 150-ләп төрлө йәштәге кешеләр ҡатнашты. Улар араһында иң өлкән конкурсантҡа - Баймаҡтан Рим Байегетовҡа 80 йәш. 70 бейеүсе икенсе турға үтте. Әйтеүҙәренсә, быйыл ҡатнашыусыларҙың географияһы ла киңәйгән.

✔РФ Федераль миграция хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, Үзбәкстандан килгән граждандарҙың сауҙа предприятиеларына сығарған салаттары тулыһынса антисанитария шарттарында әҙерләнгән. Был гастарбайтерҙарҙың ошондай эшмәкәрлеккә рөхсәттәре лә, медицина кенәгәләре лә юҡ, бар эшмәкәрлектәрен бер шәхси йортта ойоштороғандар. Салат өсөн продукттар хатта туалетта һаҡланған булған. Был мигранттарҙы бер корея милләте эшкыуар ҡатын ҡурсалаған, улар етештергән салаттарҙы супермаркеттарға ул тараткан да инде. Уға ҡарата енәйәт яуаплылығы ҡуҙғатылған.

✔Башҡортостанда "Үҙ йортом" проектын тормошҡа ашырыу дауам итә. Ул хәҙер Өфө сиктәрен үтеп, бөтөн республикаға тараласаҡ. Бөгөн ошо программала ҡатнашырға тағы һигеҙ ҡала теләк белдергән. Ә Өфөлә киләсәктә был проект Шамонино, Жуково, Дорогино ҡасабаларынан тыш, тағы ла Йоматау, Зубово, Мармылево адрестары буйынса ла дауам итәсәк. Был ҡасабаларҙағы йорттарҙың бер квадрат метры 10-14 мең һумдан ашмай. Бөтә инженер инфраструктуралар бюджет иҫәбенә башҡарыла.

✔Өфө ҡала округы Советы депутаттары Еңеүҙең 65 йыллығы айҡанлы үткәреләсәк саралар планын раҫланы. Иң тәүге бурыс, әлбиттә, ветерандарға юбилей миҙалдары тапшырыу. Шулай уҡ һуғыш ветерандарына фатирҙар биреү, уларҙың фатирҙарында ремонт үткәреү саралары ла төп иғтибар үҙәгендә.





*ҺОРАУ - ЯУАП*

## КӨНДӨҘГӨ БҮЛЕКТӘ УҠЫҺА

**Тиҙҙән пенсияға сығам. Ҡыҙыма 17 йәш, вуздың көндөҙгө бүлегендә уҡый. Уның әсәһе, йәғни минең элекке ҡатын менән килешеү буйынса үҙем теләп алимент түләйем. Ҡыҙым уҡыуын бөтөргәнгә тиклем пенсияма өҫтәмә тейеш, тип ишеткәйнем, шул турала аңлатып яҙһағыҙ ине?**

Эйе, ҡайһы бер шарттарҙы үтәгән хәлдә был мөмкин. Ҡарамағында әле хеҙмәткә яраҡһыҙ балаһы (иждивенец) булһа, атаһының хеҙмәт пенсияһының нигеҙ өлөшөнә өҫтәмә түләнергә тейешле. Хеҙмәткә яраҡһыҙ, тип, әле 18 йәше тулмаған йәки белем биреү учреждениеһының көндөҙгө бүлегендә уҡып йөрөүсе бала иҫәпләнә. Ҡыҙығыҙға 18 йәш тулғансы уның һеҙҙең ҡарамаҡта икәнде раҫламайынса ла пенсияғыҙҙың нигеҙ өлөшөнә өҫтәмә ҡаралған. Ә инде 18 йәштән һуң, әгәр ҡыҙығыҙ көндөҙгө бүлектә уҡыуын дауам итһә (ләкин 23 йәштән дә һуң түгел), һеҙҙең ярҙам уның өсөн төп һәм даими килем сығанағы булыуын документтар менән раҫларға кәрәк буласаҡ.

## АУЫРЫУ СӘБӘПЛЕ

**Миңә 65 йәш. Күптән түгел операция яһаттым: бер бөйөрөмдө алдырҙым. Эшемдә ауыр күтәрергә тура килә. Кадрҙар бүлеге начальнигы эштән китергә ҡуша, ә миңә вуз студенты - ейәнемде уҡытырға кәрәк. Медицина һығымтаһында, махсус тыуҙырылған шарттарҙа эшләй ала, тиелгән. Кәңәш бирегеҙ: ғариза яҙырғамы, юҡмы?**

Тәүҙә мәсьәләнең хоҡуҡи яғын ҡарайыҡ: медицина һығымтаһына ярашлы, һеҙҙе врачтар тәҡдим иткән еңелерәк эш менән тәьмин итергә тейештәр ине. Ләкин ундай эш булмағанлыҡтан, эш биреүсе һеҙҙең менән хеҙмәт килешеүен өҙөргә хоҡуҡлы, йәғни медицина күрһәтеүҙәре буйынса шуға ярашлы эш урыны булмау сәбәпле, тип яҙылған статья буйынса эштән бушатылаһығыҙ.

РФ Хеҙмәт кодексының 2-се өлөшө 178-се статьяһы буйынса был осраҡта эш биреүсе ике аҙналыҡ эш хаҡы күләмендә пособие түләргә бурыслы. Шуның өсөн үҙ теләгегеҙ буйынса эштән китеү хаҡында ғариза яҙмаҫҡа кәңәш бирәбеҙ.

Ә инде мәсьәләнең психологик яғына килгәндә, әйҙәгеҙ, объектив булайыҡ: эш биреүсегә, ысынлап та, оло йәштәге һәм өҫтәүенә ауыр операция кисергән хеҙмәткәргә эш табыуы еңелдән түгелдер. Етмәһә, эшегеҙ ауыр, тип яҙаһығыҙ. Күнелегеҙҙе төшөрмәгеҙ, иң мөһиме - һеҙ үҙегеҙҙә артабан да эшләй алырлыҡ көс тояһығыҙ. Ике аҙналыҡ пособие әлеге хәлдә һеҙгә артыҡ булмаҫ. Әкренләп, үҙегеҙҙән хәл һәм йәшегеҙгә яраҡлы эш табыуы ауыр булмаҫтыр, тип уйлайбыҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ХАЛЫҠ ЭШЛЕ БУЛҺЫН,

## сиратта тормаһын, тип…

**БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев рәйеслегендә үткән сираттағы кәңәшмәлә мәғлүмәт-коммуникация технологиялары үҫеше тикшерелде.**

Республикабыҙ Президентының Мөрәжәғәтнамәһендә электрон Башҡортостан булдырыу, электрон Хөкүмәт сиктәрендә БР-ҙың мәғлүмәт-коммуникация технологиялары һәм дәүләт хеҙмәттәрен электрон рәүешендә күрһәтеү тураһында айырым әйтелә. Билдәләнеүенсә, бөгөн төбәктә базалы өлөш булдырылған һәм ул уңышлы ғына эшләй. Уға дәүләт власы органдары порталы, дәүләт хеҙмәттәре сайты, дәүләт һатып алыуҙары порталы, төбәк раҫлау үҙәге, ведомство-ара мәғлүмәти бәйләнештәр системаһы, мәғлүмәти киоскылар һәм электрон карта инә. "Бурыс ябай - халҡыбыҙҙың төрлө инстанцияйар буйлап йөрөүен, сираттарҙы кәметеү, коррупция осраҡтарын юҡҡа сығарыу, ҡыҫҡаһы, граждандарыбыҙҙың тормошон еңеләйтеү", - тине кәңәшмәлә Раил Сарбаев.

"Электрон Хөкүмәт" программаһын тормошҡа ашырыу өсөн БР-ҙың Иҡтисади үҫеш министрлығына төп өс йүнәлеш беркетелгән. Был федераль башҡарма власть органдары тарафынан күрһәтелгән хеҙмәттәр тураһындағы мәғлүмәттәрҙең йөкмәткеһен тикшереүгә ҡайтып ҡалған йыйылма реестрҙың мәғлүмәт ресурсын алып барыу, методик тәҡдимдәр булдырыу, мәғлүмәттәргә мониторинг һәм анализ үткәреү.

Раил Сарбаев бөтә башҡарма власть органдарына 1 апрелгә тиклем дәүләт хеҙмәттәрен электрон рәүештә күрһәтеүгә күсереү буйынса календарь план төҙөргә һәм уны ведомствоара комиссияға тәҡдим итергә ҡушты.

* * *

**БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡарамағындағы Халыҡты эш менән тәьмин итеү дәүләт хеҙмәте идаралығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, былтыр республикала дөйөм эшһеҙлек кимәле 15 проценттан 8,2 процентҡа кәмегән, 113 мең кеше эшкә урынлаштырылған.**

Эшһеҙҙәр һанының кәмеүе республикала көрсөккә ҡаршы әүҙем саралар күреү һөҙөмтәһе ул. Республика етәкселеге, башҡарма власть, район һәм ҡала хакимиәттәре, йәмәғәт ойошмалары тарафынан да ярҙам һәм иғтибар ҙур. Хеҙмәт баҙарындағы хәлде тотороҡландырыуҙа өҫтәмә сараларҙы үҙ эсенә алған республика программаһы ла мөһим роль уйнай. "Өҫтәмә саралар программаһына ярашлы бүленгән аҡса иҫәбенә бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү, яңы һөнәрҙәргә уҡытыу, ваҡытлыса хеҙмәт урындары булдырыу, һөнәри белем биреү учреждениелары студенттары өсөн стажировка үткәреү буйынса махсус саралар ойошторолдо, - тине идаралыҡ начальнигы Тимерхан Биккинин йылға йомғаҡ яһау ултырышындағы сығышында. - Башлыса ошо программа ярҙамында республика предприятиелары һәм ойошмаларының кадрҙар потенциалын һаҡлай, көрсөктөң ауыр эҙемтәләрен йомшарта алдыҡ".

* * *

**Баш ҡаланың тышҡы иҡтисади эшмәкәрлегендә экспорт иҫәбе импорттан 4 тапҡырға күберәк. Былтырғы йыл йомғаҡтары буйынса, Өфө предприятиеларының тышҡы сауҙа бәйләнештәре 1 млрд. 352 млн. доллар тәшкил иткән.**

Бөтә тауар әйләнешенең 40 процент тирәһен минераль продукттар экспорты алып тора. Экспортта машина төҙөү продукцияһы - турбореактив һәм газотурбина двигателдәре, махсус тәғәйенләнешле автомобилдәр өлөшө лә ярайһы уҡ арткан. Был өлкәлә иң эре партнерҙар булып Һиндостан, Алжир, Ҡытай, Ҡаҙағстан тора. Химик сәнәғәт продукцияһы экспорты дөйөм экспорт иҫәбенең 6 процентын тәшкил иткән. Өфө предприятиелары, нигеҙҙә, органик химик берләшмәләр, резина әйберҙәрҙе экспортҡа сығара. Ҡара металл экспорты ла 5 процентҡа арткан. УМПО, НУНПЗ, УНПЗ, Өфөнефтехим, Өфө фанера комбинаты, Транстерминал ойошмалары иң эре экспортерҙар, тип табылды.

Сауҙа әйләнешендә импорт күләме 252,5 млн. доллар тәшкил итте. Уның нигеҙен машина төҙөү тармағы продукцияһы алып тора. Өфө предприятиелары АҠШ-тан, Францианан, Австрианан, Италиянан, Украинанан, Үзбәкстандан сәнәғәт ҡоролмаларын, тимер юлы йөк вагондарын, яңы еңел машиналар һатып алған. 2008 йыл менән сағыштырғанда, химия сәнәғәте продукцияһы һатып алыу 3 тапҡырға кәмегән. Иң эре импортер ойошмалар тип "Өфөнефтехим", "Өфөоргсинтез", "Русджам-Өфө", "НУНПЗ", "Ласселсбергер" иҫәпләнә. Өфө ҡала округы хакимиәтендә сит ил делегацияһы менән - 52, Өфө вәкилдәре, РФ төбәктәре менән һәм сит илдәрҙә 17 осрашыу үткәрелгән.

*ХОККЕЙ*

## ҠОРО ИҪӘП МЕНӘН

**Бер айға һуҙылған оҙайлы тәнәфестән һуң "Салауат Юлаев" командаһы үҙ майҙанында Мәскәүҙең "Динамо" хоккейсылары менән көс һынашты.**

Билдәле булыуынса, "Динамо" континент хоккей лигаһында иң көслө командаларҙың береһе. Көслөләр менән көс һынашыу һәр ваҡыт үтә ҡыҙыҡ һәм мауыҡтырғыс була. Бер айға яҡын ҙур хоккей уйынын күрмәйенсә, тамам һағынып бөткән көйәрмәндәр был осрашыуҙы айырыуса көтөп алды.

Уйын башта уҡ юлаевсыларҙың тотоп тыя алмаҫлыҡ көслө һөжүме менән башланды. Ҡышҡы олимпиадала Канаданың йыйылма командаһынан хурлыҡлы иҫәп менән (3:7) отолоуҙан ғәрләнеп ярһыған Александр Радуловты туҡтатып ҡара! Юҡ, булмай шул. Әле лә А .Радулов биргән пасты оҫта файҙаланып, Патрик Торесен тәүге шайбаны динамосылар ҡапҡаһына сәпәне. Осор уртаһында Константин менән Кирилл Кольцовтар иҫәпте икегә еткерҙе. Икенсе осорҙа Александр Радулов өсөнсө голдың авторы булды. Ул шулай был осрашыуҙа ла үҙенең иң тынғыһыҙ хоккейсы икәнен тағы бер тапҡыр иҫбат итте.

Мәскәү хоккейсылары ла төшөп ҡалғандарҙан түгел. Улар бигерәк тә өсөнсө осорҙа әлеңән-әле көслө һөжүмгә күстеләр, юлаевсылар ҡапҡаһы алдында ҡойон уйнаттылар. Әммә Виталий Колесник һаҡлаған ҡапҡаны асырлыҡ әмәл тапманылар.

Көйәрмәндәр ҡыуанысы сикһеҙ ине. Уйын ҡоро иҫәп (3:0) менән бөткәс, юлаевсыларҙы үрә баҫып, ҡул саба-саба ҡотланылар. "Салауат Юлаев" командаһы 123 мәрәй менән беренсе урында тамам нығынды.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Оҙаҡламай Өфөлә йәмәғәт тәртибе һағы буйынса йәш дружинниктар барлыҡҡа киләсәк. Ҡала округы Советы эргәһендәге Йәштәр йәмәғәт палатаһы ошондай инициатива менән сығыш яһаны. Бындай дружиналар төҙөү быйыл икенсе кварталда ҡуҙаллана.

✓Өфөлә былтыр 1430 ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан. 200 фатир социаль найм буйынса, 163-ө хеҙмәт торлағы сифатында бирелһә, йәш ғаиләләргә - 42, ә һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарына 176 фатир тапшырылған. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев белдереүенсә, иҡтисади көрсөк эҙемтәһендә социаль ипотека кредиты программаһы буйынса торлаҡлы булыусылар һаны кәмегән һәм былтыр был программа ярҙамында фатир һатып алыусыларҙың һаны 317-нән артмаған.

✓Европа Неврология йәмғиәттәре федерацияһы Башҡорт дәүләт медицина университеты менән берлектә Өфөлә неврология буйынса төбәк белем биреү курстары үткәреү планын раҫланы. Ул 2010 йылдың 8-10 июленә тәғәйенләнгән. Швейцария, Австрия, Германия, Словения һәм башҡа илдәрҙән лекторҙар саҡырылған. Курс йәш белгестәргә Европаның төп неврологтары менән осрашыу, уларҙың лекцияларын тыңлау, интерактив семинар дәрестәрендә, видеосессияларҙа дискуссияларҙа ҡатнашыу мөмкинлеге бирә.

✓15 апрелдә Октябрьский ҡалаһында "Ҡала башҡорттары:тел һәм демография проблемалары" тигән VI регион-ара фәнни-ғәмәли конференция үтәсәк. Докладтар электрон почта буйынса (yulchi81@mail.ru) 15 мартҡа тиклем ҡабул ителә. Ойоштороу комитетының адресы: Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 71, 401-се бүлмә. Телефондар: (347) 235-60-50, 8-927-32-77-547.

✓12 мартта Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Аҡ тирмә" башҡорт милли мәҙәни үҙәге "Башҡортостан ҡыҙы" журналы менән берлектә Республика йылына арналған "Ил тотҡаһы - ҡатын-ҡыҙ" тигән кисә үткәрә. Ул 18.30 сәғәттә башлана.

✓25 февралдә старт алған шахмат буйынса асыҡ Өфө кубогына йомғаҡ яһалды. Бындай Кубок һуңғы тапҡыр 1993 йылда үткәрелгән булған. Бынан һуң уны йыл һайын үткәрергә уйлайҙар.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ



# АЛЛЫ-ГӨЛЛӨ БАЛАҪТАРҘЫ...

## сәйетбабалар һуға

**"Ниндәй яҡшы башланғыс, яҡшы хәбәр бар, барыһы ла сәйетбабаларҙан сыға", - тип бушҡа әйтмәйҙәрҙер. Бар донъя, көрсөк, көрсөк, тип яр һалғанда, Ғафури районы Сәйетбаба ауылында тағы бер яңылыҡ уйлап сығарғандар. Йәғни бөтә яҡшы эштәрҙең башында йөрөүсе ауыл ҡоролтайы етәксеһе Закир ағай ИШМЫРҘИН балаҫ һуға торған цех асып, ауылдаштарын эшле иткән был юлы.**

Был төбәктә балаҫ һуғыусылар элек-электән булған. Тик замалар үҙгәреп, милли әйберҙәргә, бигерәк тә ҡул көсө менән яһалған эштәргә иғтибар арта башлағас, Закир ағай был боронғо һөнәрҙе тергеҙеп ебәрергә хәл итә һәм шунда уҡ эшкә тотона. Район башлығы Әхәт Шаһиев та был башланғысты хуплап, туҡыу станоктары алыу өсөн матди ярҙам бүлә. Ауыл музейындағы боронғо туҡыу станогына ҡарап, оҫталар Юнир Ишбирҙин һәм Айрат Яхин биш станок яһап бирә, ә ауыл мәҙәниәт йортонда туҡыу цехы өсөн бүлмә лә табыла. Балаҫ һуғыу эшен яҡшы белгән Рабиға апай Йәрмәйева ауылдаштарын балаҫ һуғырға өйрәтә башлай. Күпмелер ваҡыт үткәндән һуң, Ләйсән Янмырҙина, Минира Яхина, Рәмзилә Йыһаншина, Зөһрә Хәсәнова, Флүрә Юлбарисованан торған төркөм балаҫ һуғыу эшенә тотона. Тәүҙә улар ябай ғына биҙәктәр төшөрөлгән балаҫтар баҫһа, йәйләп ҡатмарлыраҡ, сағыуыраҡ биҙәклеләренә күсергә уйлайҙар. Эш күңеллерәк барһын өсөн оҫтабикәләр "Нағыш" исемле ансамбль дә ойоштороп ебәреп, ауылдаштары алдында сығыш яһарға ла өлгөргән.

Балаҫты әлегә кибеттәрҙә һатылған йөнептәрҙән һуғалар. Әммә Закир Вәлиулла улы халыҡтан һарыҡ йөнөнән иләнгән еп һатып алыу мөмкинлеге тураһында уйлай башлаған. Был осраҡта күпләп һарыҡ аҫраусылар ҙа отор ине, балаҫтар ҙа сифатлыраҡ, затлыраҡ һәм, әлбиттә, файҙалыраҡ та буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Кредит иҫәбенә йәшәүсе колхоз-совхоздарға ҡарап торғансы, яңынан боронғо кәсептәрҙе тергеҙеп эшләү күпкә өҫтөнөрәк, сөнки тәүгеләре иртәме-һуңмы, тағы ла көрсөккә төшәсәк", - ти Закир ағай Ишмырҙин. Үҙе лә тынғыһыҙ, ауылдаштарына ла тынғылыҡ бирмәй ул, йүкә бумала булһа ла эшләтеп һаттырып, аҡса табырға өйрәтергә тырыша. Закир ағай тиҙҙән кейеҙ һәм быйма баҫыу эшен дә башларға ниәтләнеп тора. Тимәк, әлегә тиклем һарыҡты ите өсөн генә көтөүселәр уның йөнөнән дә килем алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# ДОНЪЯНЫҢ ФӘЙРҮЗӘҺЕ ЛӘ...

## һәтемтәйе лә бар

◆ Бахыр баҡыр тимә: баҡырға баҡҡандың сире китер, хәсрәте кәмер, дәрте артыр.

◆ Арғымаҡҡа менгәшмә, үҙең өйрәт сабырға; тормошта ла шулай - үҙ юлыңды үҙең тап, кеше юлы мандытмаҫ.

◆ Кешегә ҡалған көнөң - атмаған таңың, үткәрә алмаған төнөң.

◆ Хәмер түгел күстәнәс, ул йоҙроҡло дөмбәҫ (ығызығы).

◆ Ҡылтым кеше - ҡалтайған таҡта.

◆ Ете ҡат йоҙаҡ менән бикләнгән хазина тиҙ юғалыусан.

◆ Ике аҡыллы кәңәшләшә, ике йүнһеҙ кәзәкләшә.

◆ Мөрхәтһеҙ күпкә лә ҡәнәғәтһеҙ, итәғәтле аҙға ла шатланыр.

◆ Етем тамыры ете ҡат - етемгә баш һалмағыҙ, үҙ тоҡомоң тамырына етемлек орлоғо һалмағыҙ (Өләсәйем һүҙе).

◆ Теше сыҡмаған сабый ҡулындағы мәмәйгә ҡарай, тешен ҡаҡҡаны кемлегенде һынай.

◆ Етем ҡорһағы ете ҡат, туйһаң да ете өҙөп, ете ҡап, тәнеңә булыр йылы ҡат.

◆ Яңғыҙ кеше - яңғыҙ ҡайын: әсе елдәр бөтә яҡлап килеп бәрелә, йөрәген, тәнен әрнетә.

◆ Аслыҡта ейгән ҡойҡанды туҡҡа сыҡҡас онотма.

◆ Дауыл бәрелеүҙән тау һелкенмәй, ел һуғылыуҙан ғына имән эйелмәй.

◆ Шәп сағыңда дуҫ-иштәрең төрлө һүҙ менән тартҡылай, дошмандарың уҡ менән ҡаҡҡылай; кәрһеҙ ҡалһаң, алмаһы бөткән алмағасты һелкетмәгәндәй, ҡағылмайҙар, һуғылмайҙар.

◆ Үҙ ҡояшың балҡымаһа, күктәге ҡояш ҡына йылытмай шул.

◆ Бала бауыр ите тиһәк тә, ул әллә нисә ҡат утлы күлдәк кейҙереүсе зат.

◆ Барҙың малын, юҡтың көнөн һорау - ил өҫтөнә төшкән ут-ялҡын ул.

◆ Тәҙрә төбөндәге гөлгә ҡарап ҡына бөтә донъя гөлсәскәнән тора, тип уйламағыҙ: билсәне лә, дегәнәге лә, шайтан таяғы ла, әреме менән кесерткәне лә туп-тулы.

◆ Был донъяның фәйрүзәһе лә, һәтемтәйе лә бар.

◆ Тирәк ағас бейек ағас, ҡара ҡарғышлы ағас: быса күрмә ҙурайғас.

◆ Ҡутырһыҙ - ауыҙ, болаһыҙ ауыл булмаҫ.

◆ Һөртә белмәһәң, хушбуйҙан да - тиҙәк еҫе, һөйләй белмәһәң, йылы һүҙҙән дә боҙ бөркөлә.

◆ Йүнһеҙҙең бүләге сир сәсер - ишек төбөнән үтмәһен; яҡшының бүләге нур һибер - бейек түрҙән төшмәһен.

◆ Һимеҙ һарыҡ - аҡҡош мамыҡтан яҫтыҡ, ябығы - ҡырлы-мырлы яҫмыҡ (таш йәки борсаҡ).

◆ Ике тамсы бер-береһенә оҡшаһа ла, тәмдәре менән айырыла; кешеләр ҙә шулай.

◆ Ҡатыны - купец, затлы кейем кейенгән; ире - кузнец, һәләмәгә төрөнгән.

◆ Аталы бала - арҡаулы, әсәле бала сәсмәүле.

◆ Тел әүеркә: ауыҙға ингән ризыҡты әйләндерә-тулғандыра; тормош та шулай - бәндәне ары һуға, бире бәрә.

◆ Фатиха алған арымаҫ, алмаған - ҡарымаҫ (йәлсемәҫ).

◆ Ас һорап ала, туҡ ялмап һала.

◆ Асылып-ябылып торған ишек кенә шығырлай, асылмағаны йәбешеп ҡата; кеше күңеле лә шулай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЯУЛЫҠ ЯБЫНЫУ - МӨХӘББӘТКӘ ТӨРӨНӨҮ

**Ҡатын-ҡыҙҙың башына яулыҡ ябыныуы - Ислам ҡанундары буйынса кейенеү генә түгел, ә мөхәббәткә төрөнөү ҙә ул. Йәғни Ислам ҡанундары буйынса кейенгән ҡатын-ҡыҙҙар - йомортҡа эсендәге һары кеүек.**

Яулыҡ ябыныуҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Шуға ла мин ни өсөн ҡатын-ҡыҙға яулыҡ ябынырға кәрәк икәнлеген һанап үтергә булдым.

◆ Сәсте ел һындырмаһын өсөн.
◆ Ҡояш сәсте көйҙөрмәһен өсөн.
◆ Күҙ теймәһен өсөн.
◆ Сихыр теймәһен өсөн.
◆ Шайтандарҙан һаҡланыр өсөн.
◆ Ирҙәр күңеленә вәсвәсә һалмаҫ өсөн.
◆ Бөхтәлек өсөн (сәстәрҙе теләһә ҡайҙа йөрөтмәгеҙ, үҙегеҙ өсөн дә, кешеләр өсөн дә был зарарлы).
◆ Ирҙәрҙән айырмалы булыр өсөн.
◆ Һөйкөмлө, мөхәббәтле булыу өсөн.
◆ Тәҡүәлек өсөн, йәғни яулыҡ ябынып йөрөү Аллаһтан ҡурҡыу билдәһе.
◆ Урамда мөьминдәр бер-береһен танып сәләм бирһендәр өсөн.
◆ Ирҙәргә тоғро булыу өсөн.
◆ Аллаһҡа ғына буйһоноуҙы аңлатыу өсөн.

**Фәрзилә УРМАНОВА.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



# ИММУН СИСТЕМАҢ НЫҒЫҺЫН, ТИҺӘҢ...

## дарыу урынына үлән эс

❖ Көн һайын 1 төш һарымһаҡ ашағыҙ. 2-3 төш һарымһаҡты ваҡлап, 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәп, 40 минут үткәндән һуң, 4-5 тамсыһын танауға тамыҙырға, тамаҡты сайҡарға була.

❖ Әлморон емештәрен 3-4 минут ҡайнатып алып, сәйгә ҡушып эсегеҙ. Бал һәм шәкәр өҫтәргә лә була. Был эсемлек һалҡын көйөнә лә бик тәмле.

❖ 2 ҡалаҡ миләш емешен 2 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтеп, ашар алдынан 0,5 стакан ҡабул итегеҙ.

❖ Ҡанды таҙартыусы сәй: ер еләге япраҡтары, эт дегәнәге (череда) үләне, аҡ сәскәне (ромашка) тигеҙ өлөштә алығыҙ. 1 стакан ҡайнаған һыуға 1 ҡалаҡ үлән һалырға һәм сәй урынына даими эсергә.

❖ Киҙеү һәм миҙгел ауырыуҙарын иҫкәртеүсе сара: 3-4 лимон, 1-2 стакан грек сәтләүеге, 300 грамм күрәгәне ит турағыс аша үткәрергә һәм 3-4 ҡалаҡ бал өҫтәп, банкаға һалырға.

❖ Бер өлөш лимон һәм мүк еләген ит турағыс аша үткәреп, ике өлөш бал өҫтәргә, һыуытҡыста һаҡларға. Иртән һәм кис ашарға.

❖ Яҙ өс аҙна дауамында ҡыҙыл төҫтәге һут (сөгөлдөр, сейә, баҡса еләге, йөҙөм, гранат, мүк еләге) эсегеҙ. Тәүге аҙнала көнөнә 3 тапҡыр 1/2 стакан, икенсе аҙнаһында - 2, өсөнсө аҙнаһында 1 тапҡыр эсергә. 10 көндән дауалау курсын ҡабатларға була.

❖ Балыҡ майы матдәләр алмашыныуын көйләй һәм атеросклерозды, иммунитет түбәнәйеүен иҫкәртә. Ул ҡатын-ҡыҙҙар организмын кәрәкле витаминдар менән тулыландыра. Төньяҡ халыҡтарында балыҡ майын "р" хәрефе булған бөтә айҙа ла эсергә кәрәк, тигән әйтем бар. Бигерәк тә ҡыш 1 балғалаҡ балыҡ майы эсеүҙе ғәҙәткә индерә алаһығыҙ.

**Ниндәй генә ысулдар булмаһын, иммунитетты ныҒытыусы төп сара булып сынығыу тора. Организмды һыуыҡҡа өйрәтеүҙе контраст душтан башлағыҙ, һуңғараҡ һалҡын һыу менән ҡойоноу, ҡарҙа яланаяҡ йөрөү кеүек сыныҡтырыусы сараларға күсә алаһығыҙ.**

✓ *Йәштәр бар ерҙә лә бер үк, тип уйлайым, тик беҙҙә улар барыбер әҙәплерәк, оялсаныраҡ. Мәҫәлән, Башҡортостанда ҡыҙҙар уҡытыусылары менән бергә тороп тәмәке тартмаҫ ине.*



*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

**Былтыр мәктәпте тамамлап, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең махсус программаһы буйынса Мәскәү һәм Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарына маҡсатлы йүнәлтмә менән уҡырға инеүсе йәштәребеҙ беренсе сессияһын уңышлы тапшырғандан һуң ҡышҡы каникулға ҡайтып, ял итеп китте. Бөгөн уларҙың береһе, М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының журналистика факультетында уҡып йөрөүсе Миәкә ҡыҙы Флорида МИҺРАНОВА Мәскәү тормошо, уға яраҡлашыу, унда үҙең булып ҡала белеү серҙәре, был ҡала биргән тәүге һабаҡтар менән уртаҡлаша.**



# ИЛҺӨЙӘР БУЛ,

## тик үҙ донъяңда ғына ҡайнама

### Яҙмыш үҙе мине һайланы...

Рәсәйҙә йәшәгән һәр баланың күңелендә, моғайын да, Мәскәүҙе күрһәң ине, Мәскәүҙә уҡыһаң ине, тигән хыял булалыр ул. Хәйер, улай тиһәң, мин бер ҡасан да был ҡалала белем алырмын, тип уйламай инем. Бәләкәй саҡтан уҡ журналист буласағымды хәл иткәс, Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инергә әҙерләндем, башҡорт телендә мәҡәләләр яҙҙым, улар ваҡытлы матбуғат биттәрендә баҫылды. Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡыған сағымда радиола тапшырыуҙар эшләй инем инде. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, маҡсатлы йүнәлтмә менән Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларының юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә мөмкинлек тыуҙы. Шулай Мәскәүгә уҡырға китеүем ҡапыл ғына килеп сыҡты.

Уҡырға ингәндә БДИ һөҙөмтәләренән тыш, өҫтәмә имтихандар ҙа бирҙек: инша яҙҙыҡ, әңгәмәләшеү үттек. Әңгәмәлә профессорҙар, журналистар төрлө һорауҙар бирҙе. Ниндәй генә өлкәгә ҡағылманы улар! Имтихандар Майкл Джексон һәм Людмила Зыкинаның үлгән ваҡытына, Обаманың Мәскәүгә килгән мәленә тура килгәс, улар тураһында ла фекер алыштыҡ, хатта Башҡортостаныбыҙ Президенты Мортаза Рәхимов, ул алып барған сәйәсәт тураһында ла һорау булды. Былдай әңгәмәгә алдан әҙерләнеп булмай, сөнки бер һорау үҙе үк башҡа һорауҙарҙы тыуҙыра. Фекер тарҡала, ҡайһы саҡта яуап бирергә ҡыйынһынып та ҡуяһың. Минеңсә, былдай ысул менән абитуриенттың белеме түгел, ә ошо моментта уның үҙен ҡулға ала белеүе, фекерен туплай, бәхәскә ҡушыла алыуы тикшерелә.

Мәскәүҙә Башҡортостанды, Өфөнө белеүселәр бар, әлбиттә, тик ҡайҙа урынлашҡан ул, тип аптыраусылар ҙа етерлек. Тәүҙә: "Нисек, һеҙ Салауат Юлаевты, Рәми Ғариповты белмәйһегеҙме?" - тип әйтке килә торғайны, хәҙер быға тыныс ҡарайым һәм былдай осраҡ килеп сыҡҡан һайын барыһына ла Башҡорт иле тураһында һөйләп йөрөйөм.

Былтыр махсус юллама буйынса Мәскәүгә 120-нән ашыу кеше киттек, уларҙың дүртәүһе - МДУ-ла. Тик төрлөбөҙ төрлө факультетта белем алыу сәбәпле, күрешеп тора алмайбыҙ. Курста көндөҙгө һәм киске бүлектә 600 кеше, улар араһында башҡа башҡорттар юҡ. Бер тапҡыр дәрестә дин тураһында һүҙ сыҡты ла, 300 кешенән торған төркөмдә мосолмандар ике кеше генә булып сыҡтыҡ.

Гимназияла ике йыл ғына уҡып өлгөрһәм дә, ул хәҙер күңелдә бер бәләкәй, йылы, матур иҫтәлек булып ҡалды. Интернатта белем алыуҙан тыш, дисциплинаға, үҙ аллылыҡҡа өйрәнеүем миңә студент тормошона тиҙерәк инеп китергә мөмкинлек бирҙе. Мәскәүҙә йәшәргә, эшләргә ҡыҙыҡмайым, Өфө миңә барыбер ҙә яҡыныраҡ.

### Хыялымдағы Мәскәү башҡараҡ ине...

Мәскәү, тип, хыялдар артынан сығып киттем, алда көткән ауырлыҡтар башҡа инеп тә сыҡманы. Поезға ултырып киткәс кенә: "Миңә 18 йәш, ошо йәшемдә генә ҡайҙалыр яңғыҙым, дуҫтарһыҙ, атай-әсәйһеҙ, туғандарһыҙ бер үҙем тормош башларға китеп барам", - тигән уй биләп алды. Тик: "Мин яңғыҙым нишләрмен, Мәскәүгә китеп дөрөҫ эшләнемме?" - тигән һорауҙарға ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтасағымды белмәй инем әле. Поездан ҡаршы алдылар, факультетҡа алып барҙылар һәм шул саҡта мин был оло ҡалала бер үҙем тороп ҡалдым. Романтик хистәр таралды һәм минең алдыма ысынбарлыҡтағы Мәскәү килеп баҫты.

Тәүге 3-4 ай ауыр булды. Мәскәү иҫ киткес ҙур ҡала һәм бында бөтөнләй тәртип юҡ кеүек тойола. Тәүҙә лекциялар ғына булғас, ҡыйынлығын тойманым, ә практик дәрестәр башланғайны... Журналистиканы яҡшы беләм, тип уйлай инем бит инде, әҙерлекле киттем, мин булдырам, тигән ышаныс көслө ине. Баҡтиһәң, әҙерәк кенә дөрөҫ юлдан китмәгәнмен, йомолғанмын, донъяуи фекерләй ҙә белмәйем икән. Әлбиттә, мин үҙ халҡымдың, үҙ республикамдың патриотымын, тик үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнау, башҡа нәмәне күрергә лә теләмәү минең файҙама булмаған. Был белем кимәлендә лә, йәштәштәрем менән аралашҡанда ла күренә. Русса аңлайым, һөйләшәм, тип уйлай инем, яңылыҡтар эшләй башлағайныҡ, русса грамматика дөрөҫ булһа ла, матур, сағыу итеп һөйләм төҙөүе ауыр эш икәнлеге асыҡланды. Шуға ла башта бөтә иғтибарымды уҡыуға йүнәлттем. Ҡапыл ғына башҡорт теленән рус һәм инглиз телдәренә күсеүе лә еңел булманы. Бер дәресте лә ҡалдырмайым, уҡытыусыларҙың артынан эйәреп йөрөйөм һәм ошо тырышлығым башҡалар араһында ихтирам яуларға ярҙам итә, тип әйтә алам.

Мәскәү иң ҡиммәт ҡалаларҙың береһе булғанлыҡтан, аҡсаны дөрөҫ тотонорға ла өйрәтте. Өфөлә нисектер, белмәйем, Мәскәү китапханаларына кеше күп йөрөй, кәрәкле китапты сират тороп уҡыған мәлдәр булды. Йәштәр бар ерҙә лә бер үк, тип уйлайым, тик беҙҙә улар барыбер әҙәплерәк, оялсаныраҡ. Мәҫәлән, Башҡортостанда ҡыҙҙар уҡытыусылары менән бергә тороп тәмәке тартмаҫ ине. Һүгенеү ҙә унда ғәҙәти күренеш. Мәскәүҙең шау-шыуына күнегә алмайым, мин үҙемде ижади кеше тип иҫәпләйем һәм артыҡ тауыш уйланырға ҡамасаулай. Университетта бик белемле, юғары интеллектлы йәштәр уҡый. Мәскәүлеләр үҙҙәрен хужа итеп, ышаныслы тота, тормоштарын нисек планлаштырғандар, шул килеш һәүетемсә генә йәшәйҙәр.

### Иң мөһиме - һөнәрем оҡшай

Үҙемде тулыһынса уҡыуға арнаным, тип әйткәйнем инде. Сослоҡ етешмәй, ни тиһәң дә, гимназияла уҡығанда ҡалаға ла ғариза яҙып ҡына сығып йөрөгән бала булараҡ, былдай етеҙ хәрәкәтле тормошҡа ҡулайлашыуы ауырыраҡ. Ә бит мин үҙемдең синыфташтарым араһында әүҙем булыуым менән айырылып тора инем. Шулай үҙемсә һығымталар яһап, тормошома төҙәтеүҙәр индереп ебәрергә тура килә. Мәскәүгә килгәс тә башҡортса яҙышырға, йәмәғәт эштәренә ваҡыт ҡалһын, тип, инглиз телен ситкәрәк ҡуйыуым да дөрөҫ булмағанлығын аңланым.

Әлеге мәлдә Мәскәүгә китеп яңылышманыммы икән, тигән борсолоуҙарҙан ҡотола барам шикелле, иң мөһиме - һөнәр һайлауҙа яңылышманым, тип уйлайым. Эске донъямда үҙгәрештәр ҙә булды, ҡапыл ғына балалыҡтан сығырға, өлкән кешегә әйләнергә тура килде. Элек көйһөҙләнеп, үҙһүҙләнеп тә ала инем, ә Мәскәүҙә һинең мыжыуың бер кемгә лә кәрәкмәй, йыуатыр кешең дә юҡ. Дуҫтарың булһа ла, бындағы кеүек 15 йыл белгән дуҫтар түгел. Бүлмәлә дүрт ҡыҙ йәшәйбеҙ, үҙ-ара һәйбәт мөнәсәбәттәбеҙ, тик барыбер тулыһынса асылып бөтмәйбеҙ.

Курсҡа карьера эшләүҙе маҡсат итеп ҡуйған кешеләр йыйылған. Минең йәштәге генә йәш ҡыҙҙар: "Миңә ғаилә, бала кәрәкмәй, мин үҙемде экрандан күрергә теләйем", "Сочиҙағы олимпия уйындарында журналист булып эшләйәсәкмен," - тип хыяллана. Аныҡ пландар менән, алдан әҙерләнеп килгән кешеләр яҡшы баһа, уҡытыусының иғтибарын яулау өсөн эргә-тирәһендәге башҡаларҙы йырып үтә. Һин шундай кешеләр араһында ниндәй ысулдар менән булһа ла артта ҡалмаҫҡа тейешһең. Шулай ҙа сессия ваҡытында дуҫлашып, яҡынайып киттек.

Ни тиклем генә көслө булһаң да, ҡайһы саҡта күңел төшөп китә. Шундай саҡтарҙа бер генә уй ҡотҡара: меңдәр араһынан ошо программаға эләгеп, Мәскәү һынлы Мәскәүҙең алдынғы уҡыу йорттарының береһенә уҡырға ингәнһең икән, тырышырға кәрәк. Университетты тамамлағас, республикаға ҡайтып эшләргә хыялланам. Башҡортостан мәҙәниәтен яратам, ундағы сәйәсәт оҡшай, шуға, ауыр булһа ла, күңелемә яҡын һөнәрҙе үҙләштереп, оҫта журналист булып, Башҡортостаныма хеҙмәт иткем килә.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҠЫҘ-ҠАТЫНДЫҢ КӨЙҺӨҘЛӨКТӘРЕНӘ...

## бары ит-ат ҡына түҙә

Хоҙай Тәғәлә гүзәл Еребеҙҙе яралтҡас, уның хозурлығы менән һоҡланып, тирә-яҡты байҡап, Ер өҫтөнән әкрен генә осоп үтергә булған. Ғорур тауҙар Уға баш эйгән, Уның йылы ҡарашынан төрлө төҫтәге сәскәләр таждарын асҡан, ағастар, үләндәр йәшәргән. Бына Хоҙай бер ап-аҡ лилиә сәскәһен өҙөп ала ла, уны зәп-зәңгәр диңгеҙ өҫтөнә ташлай. Ел ул сәскәне ҡосоп алып, диңгеҙҙең ап-ап күбегенә урай. Бер минут эсендә күбек гөлләмәһе эсенән сәскә кеүек нескә һәм хуш еҫле, ел кеүек еңел, диңгеҙ кеүек үҙгәреүсән, диңгеҙ күбеге кеүек матур һәм сағыу... ҡыҙ-ҡатын пәйҙә була. Ул диңгеҙ һыуында үҙ сағылышын күрә лә ҡысҡырып ебәрә:"О-о, мин ниндәй матурмын!" Шунан ул тирә-яҡты байҡап ала:"Донъя ниндәй матур!" Ҡыҙ-ҡатын һыуҙан ярға ҡоп-ҡоро килеш килеп сыға (шунан алып ҡыҙ-ҡатындар һәр ваҡыт һыуҙан ҡоро сыға). Ҡыҙ-ҡатынды күреү менән ерҙәге бар үҫемлектәр сәскә ата, ә күктән миллионлаған күҙҙәр уны ҡыҙыҡһынып күҙәтә башлай. Был күҙҙәр шундай һоҡланыу менән баға - ошо мәлдән күктә йондоҙҙар яна башлай. Ә ҡыҙ-ҡатынға көнләшеп баҡҡан Зөһрә йондоҙ бар йондоҙҙарға ҡарағанда ла сағыураҡ яна.

*АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!*

# ТИПТӘР ҺҮҘЕНЕҢ ...




## килеп сығышы тураһында

**Билдәле ғалим-тарихсыбыҙ Әнүәр ағай Әсфәндийәровтың көнбайыш башҡорттары тарихына арналған ғилми мәҡәләһен гәзитебеҙҙә баҫырға әҙерләгәндә уның типтәр сословиеһына арналған өлөшөн айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул иттем.**

Ғалим типтәрҙәрҙең милли сығышы төрлөсә булып, улар араһында ерһеҙ башҡорттарҙың, ситтән күсеп килгән татар, сыуаш һәм башҡа халыҡ вәкилдәренең булыуын тарихи документтар ерлегендә раҫлай. Уның Башҡортостандан башҡа бер төбәктә лә типтәр сословиеһы теркәлмәүе һәм типтәрҙәрҙең тәүгеләренең ерһеҙ ҡалған башҡорттарҙан булыуы хаҡындағы фекерҙәре иғтибарға лайыҡ.

Бәғзе донъя телдәрендәге уртаҡ һүҙ тамырҙарының үҙебеҙҙең башҡорт телендә лә булыуы менән ҡыҙыҡһынған кеше булараҡ, мин Ә. З. Әсфәндийәровтың "типтәр" һүҙенең этимологияһы хаҡындағы фекерҙәрен бик ентекләп уҡыным. Килмешәктәрҙең айырым дәфтәргә теркәлеүе менән бәйләп, күптәр "типтәр" һүҙенең "дәфтәр"ҙән килеп сығыуына ышана. Ғалим был фараздың ысынбарлыҡҡа тура килмәүе, ошо ике һүҙҙе бәйләүҙә бер ниндәй ҙә логика булмауы хаҡында яҙа. Ябай тел анализы ла ошо фекерҙең дөрөҫлөгөн раҫлай. Дин, уҡыу-яҙыу, фән өлкәһенә ҡараған байтаҡ ҡына һүҙҙәр телебеҙгә ғәрәп һәм фарсы теддәренән килеп ингән. Фарсы һәм ғәрәп һүҙҙәренең әйтелеше башҡорт кешеһендә әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай, шуның өсөн уларҙы үҙгәртеү, ҡулайлаштырыу ихтыяжы ла юҡ. "Дәфтәр" һүҙе күп быуаттар элек телебеҙгә нисек килеп ингән, хәҙер ҙә бер үҙгәрешһеҙ ҡулланыла. Шулай булғас, "дәф" ижегенең "тип"кә әүерелеүенә ышаныу бер ҡатлылыҡ булыр ине. Унан һуң, айырым кешене генә түгел, тотош халыҡ төркөмөн йәнһеҙ әйбер-предмет исеме менән атау халҡыбыҙға хас күренеш түгел.

Минеңсә, "типтәр" һүҙенең килеп сығышын "тибеү - тибелеү - типтереү - типтер - типтәр" һүҙ теҙмәһе нигеҙендә аңлатыу шулай уҡ ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Берҙән, "типтер" һүҙе "типтереү" ҡылымының бойороҡ һөйкәлеше булып, тел ҡанундарына ярашлы, бер нисек тә исемгә әүерелә алмай, һәм башҡорт телендә ошо рәүешле яһалған бер исем дә юҡ. Икенсенән, "тибеү" һүҙенең башҡа кешене түбәнһетеү, мәсхәрәләү, күрә алмау кеүек мәғәнәүи төҫмөрләнештәре бар: халыҡ мәнфәғәттәре өсөн ихтилалда ҡатнашып, аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙған башҡорт типтәре лә үҙ ҡан-ҡәрҙәштәре тарафынан "тибелгән" булып сыға түгелме һуң? Билдәле булыуынса, йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тупаҫ боҙоусылар ғына үҙ ырыуынан ҡыуып сығарылып, "тибелеү"гә дусар ителгән. Ә башҡа тарафтарҙан күсеп килеүсе типтәрҙәр "тибелеп" түгел, башлыса үҙ ирке менән башҡорт аҫабалары биләгән ерҙәргә һыйынырға тырышҡан.

"Типтәр" һүҙенә иғтибарлабыраҡ ҡараһаң, уның ике өлөштән - "тип" тамырынан һәм "тәр" күплек ялғауынан хасил булғанын күрергә була. Тимәк, беҙгә ошо "тип" тамырының килеп сығышын һәм мәғәнәһен асыҡлау фарыз. Булмаһа, ошо ниәтебеҙҙе күҙ уңында тотоп, фекеребеҙҙе Кавказ тарафтарына йүнәлтәйек.

Билдәле булыуынса, ингуш һәм чечен халыҡтарының ижтимағи тормошонда "тейп" тип аталған ырыу берләшмәләре ҙур роль уйнай. Чечен телендә был һүҙ "тайп" тип әйтелә. Бер тейпҡа ҡараған кешеләр һәр осраҡта ла нәҫелдәш заттар булмай, улар уртаҡ территория һәм бер үк һөнәр менән шөғөлләнеү ерлегендә лә берләшә. Мәҫәлән, пешхой тейпы сүлмәк яһаусыларҙан хасил булған. Әйткәндәй, 130-ҙан ашыу чечен тейптарының 35 проценты сығышы буйынса чечен халҡына ҡарамай икән, сөнки тейпҡа башҡа урындарҙан күсеп килеүселәр ҙә инә алған. Беҙгә бына нимә мөһим: чечен тейптарының, бигерәк тә боронғоларының, һәр береһенең изге тауы, йәки тау түбәһе булған. Был башҡорт ырыуҙарының аймаҡтарға, икенсе төрлө әйткәндә, түбәләргә бүленеүенә бик оҡшаш. Чечен тейпы башҡорт түбәһе һымаҡ ул.

Фекер ебен артабан һүтә бирәйек. Боронғо ғәрәптәр бер ырыу-ҡәбиләгә ҡараған йәиһә бер дингә табынған кешеләр төркөмөн "таифә", тип атай. Йәнә, ошо уҡ тамырҙан яһалған ҡылым күсеп йөрөү, сәйәхәт итеүҙе лә аңлата икән. Ғәрәп бәҙәүиҙәренең төркөм-таифәләргә бүленеп, сикһеҙ сүллектәрҙә күсмә тормошта йәшәгәне лә билдәле. Тимәк, Кавказ халыҡтарының "тейп" һәм ғәрәптәрҙең "таифә" һүҙҙәренең тамырҙаш һәм мәғәнәләш булыуы шик тыуҙырмай.

Бына ошо тарихи-лингвистик экскурсты тамамлап, үҙебеҙҙең типтәрҙәргә ҡайтайыҡ. Һис шикһеҙ, типтәрҙәр - күсеп йөрөүсе(!) төркөм, башҡа "тайп", икенсе "таифә" кешеләре. Башҡортта ҡалын ижекле һүҙҙәрҙе йомшартып әйтеү осраҡтары бар: аҙ - әҙ, асы - әсе һ.б. Тимәк, "тайп - тәйп - тейп" сиратлашыуын дөрөҫ тип тапһаҡ, уның күплек варианты булараҡ, "тәйптәр - тейптәр" һүҙе килеп сыға. Мәғәнәүи яҡтан ҡарағанда ла, типтәр тип аталғандар (башҡорт булған хәлдә лә) икенсе төптән, башҡа түбәнән, башҡа төркөмдән күсеп килеүселәр булған бит.

Әйткәндәй, бер урындан, билдәле йүнәлештән ситкәрәк китеүҙе аңлатҡан "тайпылыу" һүҙе лә ошо уҡ тамырҙан сыҡҡанға оҡшай. Ғөмүмән, донъя телдәре күҙгә күренмәҫ боронғо мәғәнәүи һәм лингвистик ептәр менән бәйләнгән. Беҙ һис иғтибар итмәгән, башҡортса ла "тип", тип әйтеп йөрөгән ҡәҙимге урыҫ һүҙе лә әле тикшергән һүҙҙәргә тамырҙаш та, мәғәнәләш тә булып тойола: бер класҡа, бер төркөмгә берләштереп булған нимәләргә ошо "тип" һүҙен ҡулланабыҙ бит, йәмәғәт.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

Ҡыҙ-ҡатын урмандар һәм ҡырҙар буйлап йөрөй. Барыһы ла уға ҡарап һоҡлана, аһ итә. Әммә быларҙың барыһы ла ҡыҙ-ҡатынды ялыҡтыра һәм ул: "Йә, Хоҙай, һин мине шундай матур итеп яралттың! Барыһы ла миңә һоҡлана, әммә мин уларҙың һоҡланғанын ишетмәйем..." Ҡыҙ-ҡатындың был зарын ишеткәс, Хоҙай ҡоштарҙы барлыҡҡа килтерә. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡоштар ҡыҙ-ҡатындың матурлығына дан йырлай башлай. Гүзәл зат башта уларҙың йырын кинәнес менән тыңлай, әммә бер көн үткәс, ялыға һәм тағы Хоҙайға өндәшә: "Әй, ҡөҙрәтле Хоҙай, ҡоштар минең матурлығымды маҡтап йырлай, ләкин берәү ҙә мине ҡосаҡларға һәм миңә һыйынырға теләмәгәс, ул ниндәй матурлыҡ инде!" Хоҙай Тәғәлә шунда уҡ һығылмалы, матур йыланды барлыҡҡа килтерә. Ҡыҙ-ҡатын ярты көн буйы ҡуйынына һыйынған, һарлыҡҡан, юхаланған йылан менән ваҡыт үткәрә лә, унан да биҙерәй. Тағы Хоҙайға зарлана: "Әгәр ҙә мин ысынлап та матур булһам, башҡалар миңә оҡшарға тырышыр ине..." Хоҙай ҡыҙ-ҡатындың көйһөҙлөгән көйләргә теләп, маймылды яралта. Маймыл ҡыҙ-ҡатындың һәр хәрәкәтен ҡабатлай, уның кеүек ҡылана, шаяра. Әммә ҡыҙ-ҡатындың маймыл менән мауығыуы алты сәғәткә генә етә, шунан ул илай-илай тағы Хоҙайға мөрәжәғәт итә: " Эйе, мин матур. Минең турала йырлайҙар, мине ҡосаҡлайҙар, аяҡ аҫтымда шыуышалар, миңә оҡшатырға тырышалар, миңә һоҡланалар һәм көнләшәләр ҙә. Көнләшеүҙән миңә зыян итергә теләүселәр булһа, кем мине һаҡлар?" Хоҙай көслө, ҡеүәтле арыҫланды яралта. Әммә ҡыҙ-ҡатын арыҫландың ышаныслы ҡурсыуы менән өс сәғәт кенә ҡәнәғәт була, шунан ул тағы зарланырға тотона:"Мин матурмын. Мине иркәләйҙәр. Ә мин бер кемде лә иркәләмәйем. Мине яраталар, мин берәүҙе лә яратмайым. Бынау ҡурҡыныс арыҫланды ярата алмайым бит инде мин". Шул минутта ҡыҙ-ҡатын эргәһендә бәләкәй генә көсөк барлыҡҡа килә. "Ой, ҡалай матур хайуан! Мин уны ҡалай яратам!" тип ҡысҡырып ебәрә ҡыҙ-ҡатын.

Хәҙер инде уның бөтөн теләгән нәмәһе лә бар. Һорар үтенесе лә ҡалмаған. Ҡыҙ-ҡатын ошо уйҙан асыуланып китә лә, этенә киҙәнә - уныһы сыйылдан йүгереп китә. Шунан ул Арыҫланға ла килтереп һуға - уныһы үкереп ситкә китә. Йыланды аяғы менән тибеп осора - уныһы бер ыҫылдай ҙа, шыуышып китә. Уның асыуынан ҡурҡып, маймыл да ҡаса, ҡоштар ҙа осоп китә. "О, мин бәхетһеҙ! - тип илай ҡыҙ-ҡатын. - Кәйефем яҡшы булғанда барыһы ла мине ярата, маҡтай, иркәләй, мин асыуланғайным, барыһы ла ҡасып китте. Мин яңғыҙмын. Йә, Хоҙай, һуңғы тапҡыр бер үтенесемде үтә берүк: минең кәйефемә ҡарамай, хатта асыулы сағымда ла минән ҡасып китмәй торған, минең бар көйһөҙлөктәремә лә сыҙаған бер йән эйәһен яралтсы..." Хоҙай Тәғәлә уйлаған-уйлаған да... ҡыҙ-ҡатын янына ир затын яралтҡан.

*ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ*



# ҒӘБДЕЛХАҠ ҒӘБИТОВ

Ғәбделхаҡ Ғәбитов 1918 йылда Башҡортостан автономияһының хәрби көстәре - Башҡорт армияһын ойоштороу эшендә мөһим роль уйнаған башҡорт офицерҙарының береһе. Тыумышы менән Ырымбур губернаһы Троицк ҡалаһынан.

Атаһы мөғәллим була. Атаһынан етем ҡалып, йәмәғәт аҡсаһы иҫәбенә (бәлки, "Башҡорт стипендияһына" белем алғандыр) уҡый. Беренсе донъя һуғышы башланғас, хәрби хеҙмәткә алына. Унда хәрби училище тамамлап, подпоручик чинында ҡайта.

1918 йылдың май аҙағында Силәбелә власть чехословактар ҡулына күскәс, 2 июндә Арғаяш кантонының Мәтәл ауылында подпоручик Ғәбделхаҡ Ғәбитов рәйеслегендә Башҡорт милли-азатлыҡ эшмәкәрҙәре съезға йыйыла. Съезд Чехословактар менән һөйләшеү өсөн Ғ. Ғәбитов, С. Мерәҫов һәм Н. Таһировтарҙы Силәбегә ебәрә. Башҡорт вәкилдәре чехословактар менән уртаҡ тел таба. Силәбенең Халыҡ власы комитетында Башҡорт шураһы ойошторола. Уның ағзалары итеп Ғ. Ғәбитов, С. Мерәҫов, Н. Таһиров, Т. Ғисмәти, Ф. Сөләймәнов, Ғ. Мөхәмәтйәровтар һайлана.

Подпоручик Ғәбитов башҡорттар исеменән Чехословак корпусы командалығы менән милли ғәскәр ойоштороу мәсьәләһе буйынса һөйләшеүҙәр башлай. Чехословактар башҡорттарға ҡорал менән ярҙам итергә ризалаша. Һөҙөмтәлә, подпоручик Ғәбитов, Зәки Вәлиди Силәбегә килеп, Башҡорт хөкүмәте эше башланғансы ҙур эштәр башҡарып өлгөрә.

Зәки Вәлиди килгәс, Башҡорт армияһын ойоштороу эше менән шөғөлләнеүсе махсус орган - Башҡорт хәрби шураһы ойошторола. Хәрби шураны Вәлиди етәкләй, уның урынбаҫары итеп Ғ. Ғәбитов тәғәйенләнә. Ул Себер хөкүмәте менән бәйләнешкә инеп, башҡорт ғәскәрҙәрен ҡорал, хәрби кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү буйынса Башҡорт хөкүмәте исеменән һөйләшеүҙәр башлай. Июль башында Башҡорт хөкүмәте уны, киң вәкәләттәр менән Омскиға ебәрә. 1918 йылдың 2 июлендә Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге тарафынан бирелгән танытмала былай тиелгән: "Предъявитель сего товарищ председателя Военного совета при военном отделе Правительства Башкирии подпоручик Абдул-Хак Габитов командируется для переговоров с Временным Сибирским правительством и командующим войсками Западной Сибири по вопросам организации и управления Башкирских войск".

Подпоручик Ғәбитовтың Омскиҙағы һөйләшеүҙәре уңышлы тамамлана. Себер хөкүмәте милли ғәскәрҙәр төҙөү идеяһын өнәп бармаһа ла, Аҡ армияның айырым хәрби берәмеге булараҡ, Башҡорт ғәскәрен ойоштороуға ризалыҡ бирә. Был граждандар һуғышы барышында Башҡортостан автономияһының йәшәйәшен, киләсәген тәьмин иткән ҙур уңыш була. Ошоноң менән Ғәбделхаҡ Ғәбитов башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙа баһалап бөткөһөҙ эш башҡарып сыға.

Себер хөкүмәтенең ярҙамы менән Башҡорт хәрби шураһы башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшен йәйелдереп ебәрә. Июнь-июль-август айҙарында 1-се, 2-се, 3-сө, 4-се, 5-се Башҡорт пехота полктары һәм 1-се Башҡорт кавалерия полкы ойошторола. 24 июль подпоручик Ғәбитов 2-се Башҡорт пехота полкы командиры итеп тәғәйенләнә. 2-се полктың частары ҡыҙылдар менән һуғыштарҙа ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Июль аҙағында Екатеринбург ҡалаһын азат итеүҙә ҡатнаша. Ҡала халҡы башҡорт полкына рәхмәт йөҙөнән "Доблестным освободителям - благодарный Екатеринбург" тигән яҙыу менән байраҡ бүләк итә.

1918 йылдың көҙөндә һаулығы насарайыу сәбәпле Ғ. Ғәбитов хәрби хеҙмәттән китә. Уның исеме милли хәрәкәт документтарында башҡа осрамай. Подпоручик Ғәбделхаҡ Ғәбитовтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

# ҠЫҘ БАЛАҠАЙ ТЫУҺА,

## бәхете булмаһа...

**Ир-аттар үҙҙәре генә булғанда нимә хаҡында әңгәмәләшә икән, тип уйлайһығыҙ? Был һорау - аксиома: улар, әлбиттә, һәм, һис шикһеҙ, ҡыҙ-ҡатын хаҡында һүҙ алып барыусан. Был - тәбиғи. Беҙ ҙә өсәүләп, йәғни редакциябыҙҙың ир-уҙамандары Вәлиәхмәт Бәҙретдинов, Артур Батыршин һәм мин, Әхмәр Үтәбай, йыш ҡына, бигерәк тә төшкө ашҡа барған саҡта һәм ҡайтҡанда юл буйына төрлө темаларға бәхәс ҡороп, шунан үҙебеҙгә кинәнес табып, үҙенсәлекле рәүештә ял итергә яратабыҙ. Шул уҡ ваҡытта ҡыҙ-ҡатын, ир-ат менән ҡыҙ-ҡатын мөнәсәбәттәре хаҡында фекер алышҡылайбыҙ. Беҙҙә яңылыш аңлап ҡуйыуҙарынан шөбһәләнеп, ҡыҙ-ҡатындарҙан алдан уҡ ғәфү үтенәбеҙ: беҙ нәфис заттарҙан көлмәйбеҙ, ә уларҙың затына, психологияһына, фәлсәфәһенә бәйле күренештәр хаҡында асыҡтан-асыҡ һөйләшәбеҙ. Ҡай сағында бәхәсләшеп тә киткеләйбеҙ, әммә ҡыҙ-ҡатын затын үтә ныҡ яратҡанға күрәлер инде, уртаҡ телде тиҙ табабыҙ. Был әңгәмә-бәхәстәрҙә, әлбиттә, алдынғы ҡарашлы педагог, профессиональ психолог, күп телдәр белеүсе этимолог, үҙешмәкәр тарихсы Вәлиәхмәт ағай Бәҙретдинов төп ҡылда уйнай. Әле бына 8 март - Халыҡ-ара ҡыҙ-ҡатындар байрамы алдынан төшкө ашҡа барғандағы һөйләшеүҙәребеҙҙе аҡ ҡағыҙға төшөрөү маҡсаты менән сәй өҫтәле артына ултырҙыҡ. Әңгәмә башлар өсөн "талаш һөйәген", һәр саҡтағыса, мин ырғыттым.**

**Әхмәр Үтәбай: Бөлеш бешерергә яратҡан бер ҡатын ғүмер буйы иренә бөлештең төбөн ашатып, үҙенә өҫтөн ҡалдырып булған. Ҡатын үҙе бөлештең төбөн яратһа ла, иренең күңелен уйлап, үҙе бигүк яратмаған бөлеш өҫтө менән мөрхәтһенгән. Улар ҡартайып, өбей менән бабай булғас, шул асыҡланған: баҡтиһәң, ир, бөлештең өҫтөн яратҡан көйгә, ҡатынының күңелен уйлап, уның үҙе яратмаған өлөшөн ашаған булған. Ир менән ҡатындың ошо рәүешле бөлештең үҙҙәре яратмаған өлөшөн ашап, ғүмерҙәрен үткәреп ебәреүе үкенесле түгелме икән?** Бына шундай ҡыҙыҡлы ғаилә тормошо күренешенән фәһемле һығымталар яһарға була:

1. Ир менән ҡатын, хатта бер-береһен артыҡ яратмаған хәлдә лә, ғаиләне һаҡлар өсөн үҙлегенән сигенеп, бер-береһенә ташлама яһап йәшәргә бурыслы.
2. Яратҡан кешеңдең күңелен ҡыймайым, тиһәң, ғүмер буйы үҙ күңелең ятмаған ғәмәлде башҡарып та йәшәргә тура килә.
3. Ир менән ҡатын үҙенең күңел ҡушыуына ҡаршы килеү менән риза булып йәшәү логикаһын һаҡламаһа, уларҙың ғаилә бөтөнлөгө оҙаҡҡа бармаясаҡ.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Бында әллә ниндәй үтеп сығып булмаҫлыҡ ҡаршылыҡ күрмәйем. Мин, ғөмүмән, кешенең ир-ат менән ҡыҙ-ҡатынға бүленеүен шартлы күренеш, тип иҫәпләйем. Сөнки ир-ат һәм ҡыҙ-ҡатын тәнендә Аллаһы Тәғәлә маҡсаты менән бер үк кеше йәне йәшәй. Йән енескә бүленмәй. Шуға ҡарамаҫтан, ғаиләлә ир-атты диктатор итеп күрергә тырышыу бар. Әммә шулаймы икән? Ғаиләлә нисә бала тыуырын ир түгел, ҡатын хәл итә. Бала яралған хәлдә лә, уны тыуҙырыу-тыуҙырмау мәсьәләһен дә ҡатын-ҡыҙ хәл ҡыла. Ни өсөн "Өйөбөҙ шулай булырға тейеш, беҙгә мотлаҡ машина, баҡса кәрәк", - тип әйткән ир-ат - диктатор ҙа, ни өсөн, шунсама ғына бала табырға теләйем, тигән ҡыҙ-ҡатын диктатор түгел? Минеңсә, ошондай ҡапма-ҡаршылыҡтар булмаһа, кешелектең социаль яҡтан ир-атҡа һәм ҡыҙ-ҡатынға бүленеүе булмаҫ ине. Ике хата фекер таралған. Тәүгеһе: донъяға ир-ат хужа, ә ҡыҙ-ҡатын - уға ялсы. Дөрөҫөн әйткәндә, өйҙөң диктаторы бөгөн ҡыҙ-ҡатын. Иренә ниндәй костюм, ниндәй ботинка кейергә кәрәк икәнен дә ул хәл итә. Ир-ат, мәҫкен, "Ҡатыным миңә нимә алып бирер икән?" - тип көтөп ултыра. Ир-ат бөгөн ҡатынының иң өлкән балаһына, улына әйәрелде. Күп кенә ҡатындар ирҙәре хаҡында шулай әйтә лә. Икенсе хата фекер: ир-ат көслө, ихтыярлы, ҡыҙ-ҡатын иһә илап ҡына барған көсһөҙ зат итеп күҙ алдына килтерелә.

**Әхмәр Үтәбай:** Ҡыҙ-ҡатын нескә зат булыуы менән көслө, сөнки нескә зат аяулы, һәм уны закон да яҡлай. Миҫал өсөн: ҡулында сабыйы булған әсәне, хатта ғәйепле булған хәлдә лә, беҙҙең суд яҡлаясаҡ.

**Артур Батыршин:** Ғүмере буйы иренә бөлештең төбөн ашатҡан ҡатын миҫалына килгәндә, шуны әйтергә була: мөхәббәт ике яҡтан да ниндәйҙер ҡорбан килтереүҙе, был осраҡта ташлама яһауҙы талап итә. Ҡатын: "Ирем мине лә мин уны яратҡан һымаҡ ярата, һәм ул мине тағы ла нығыраҡ яратһын өсөн уға бөлештең иң тәмле өлөшөн бирәм", - тип эш иткән. Бының менән ул иренең үҙенә ҡарата булған тойғоларын һаҡлап ҡалырға тырышҡан. Ә инде иргә килгәндә, ул да ҡатыны һымаҡ уҡ уйлап, үҙенең ысынында ниҙе теләүе хаҡында өндәшмәгән. Ә инде йәндең енесе булмай, тигән фекергә әллә ни ышанып етмәйем. Ни өсөн тигәндә, ир-ат менән ҡыҙ-ҡатындың бер-береһенән ныҡ айырылыуы йәндәрҙең дә ниндәйҙер айырмаһы барлығы хаҡында һөйләй.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Ҡыҙ-ҡатын, ир-ат йәндәре айырмаһы мәсьәләһен был ике енес психологияһы айырмаһы менән бутарға ярамайҙыр. Сөнки ир менән ҡатындың йәндәре яратыша, ә психологиялары ҡапма-ҡаршы. Шул уҡ ваҡытта ир-аттың, үҙ психологияһына ярашлы, ҡыҙ-ҡатын психологияһына хас булған сифаттарҙы күрә алмауы, яратмауы ла бар, ә бына уның йәнен ярата.

**Әхмәр Үтәбай: Статистика буйынса донъя йөҙөндә, бигерәк тә беҙҙең илдә ҡыҙ-ҡатын күберәк йәшәй. Ни өсөн ҡыҙ-ҡатынтәнен йән оҙаҡ ваҡыт ташлап киткеһе килмәй икән? Шул хаҡта уйлап ҡарағанығыҙ бармы? Әллә йән ҡыҙ-ҡатынды нығыраҡ яратамы икән? Тимәк, йән ҡыҙ-ҡатында оҙағыраҡ ҡалырға теләгәс, ул йән ир-аттыҡынан айырыла булып сыға түгелме?**

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Ҡыҙ-ҡатын йәне физик һәм рухи донъяның төрлө йөғонтоларына нығыраҡ яраҡлашҡан, шулай уҡ тәбиғәте, тән ныҡлығы буйынса ла ҡыҙ-ҡатын көслөрәк. Ҡыҙ-ҡатын йәненең физик һәм энергетик донъя менән бәйләнеше көслөрәк, сөнки ғүмер энергияһы уға күберәк һалына. Икенсенән, ҡыҙ-ҡатын икенсе ғүмергә башланғыс бирә, башҡа йәнле тәнде (бәпесте) тыуҙырыу һәм ҡурсалап үҫтереү өсөн ул оҙағыраҡ йәшәргә тейеш.

**Артур Батыршин:** Бында әсә инстинкты хаҡында һүҙ алып барырға кәрәктәр. Ир-атта, мәсәлән, атайлыҡ инстинкты бар, әммә ҡыҙ-ҡатындың әсәлек инстинктына ҡарағанда ул көсһөҙөрәк.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Дөрөҫөн әйткәндә, борон-борондан нәҫел-нәсәп төбө ҡатын-ҡыҙҙа булған. Генетик тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, ырыу сифаттарын һәм билдәләрен балаға ҡыҙ-ҡатын бирә. Ир заты балаға башлыса шәхси сифаттарын ғына күсерә. Беҙҙең хәҙерге башҡорт ҡыҙ-ҡатындарында иң боронғо замандағы архетип һаҡланып ҡалған. Әйткәнебеҙҙән һығымта: борон-борондан ҡыҙ-ҡатын ил-йортҡа хужа булған. Матриархат дәүерендә балалар атайҙарын белмәгән, әсәләрен генә белгән.

Әммә беҙҙең нәфис заттарыбыҙҙың барыһы ла үҙ асылына тоғромо, үҙ бурыстарын үтәйме? Уларҙың бер өлөшө тәмәке тартырға, араҡы эсергә, тик ир-атҡа ғына хас булған насар ғәҙәттәргә өйрәнде. Мәсәлән, кейәүгә сыҡмаған ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәренең тәненең дә, йәненең дә бурысын үтәмәй, илаһи маҡсатын тормошҡа ашырмайынса донъянан китә һәм уларҙың йәшәүенең төп мәғәнәүи юҫығы юҡҡа сыға. Борон нисек булған? Бала табыр өсөн ҡыҙ-ҡатынға мотлаҡ кейәүгә сығыу кәрәк булмаған, ул балаһын яралтыуҙа ҡатнашҡан ир оҡшамай башлаһа (ялҡауланһа), уны ҡыуып сығарған. Шундай ир-ат башҡа иңәй ырыуҙары тарафынан ҡабул ителмәйенсә, асарбаҡ-бомж булып йөрөгән.

**Әхмәр Үтәбай:** Ә ни өсөн ҡыҙ-ҡатын шундай кире йөғонтоға бирелә, ир-ҡыҙға әйәрелә һуң? Сөнки уның үҙен ысын мәғәнәһендә ҡыҙ-ҡатын итеп тойҙортоп торорға тейешле булған, бының өсөн шарттар тыуҙырырға бурыслы ир-ат енес булараҡ юҡҡа сығып бара түгелме? Был тәңгәлдә тикшеренеү алып барыусылар, мәсәлән, енси яҡтан ҡәнәғәтләнеү тапмаған ҡыҙ-ҡатындар йә тәмәке тарта, йә араҡы эсә, йә аҙғын юлға баҫа, тигән һығымталар яһаған.

**Артур Батыршин: Башҡаларҙы ғәйепләп булмаҫлыҡ барлыҡ бә-**



*✓ Башҡорт халҡында ҡыҙ-ҡатынға бик һаҡсыл ҡараш һәм мөнәсәбәт булған. Ҡыҙ бала гәүһәргә тиң булған, уны бик ҡиммәтле зат күреп тәрбиәләгәндәр. "Ҡыҙ" һүҙе үҙе үк ҡиммәтле нәмә тигәнде аңлата.*



# БӘХЕТЕ БУЛҺЫН, тыумаһын

**ләләрҙә лә ир-атты ғәйепләйҙәр инде ул. Ғәйепләр өсөн улай ҙа беҙ бар әле. Шулай ҙа беҙ хәҙер ниндәй дәүерҙә йәшәйбеҙ һуң? Матриархатмы? Патриархатмы? Әллә матри-патриархатмы?**

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Беҙ хәҙер патриархат заманы икән, тип уйлайбыҙ ғына. Ысынында иһә, хәҙер атайҙар өҫтөнлөгө юҡҡа сыҡҡан, матриархат та юҡ. Беҙ ер менән һауа араһында тороп ҡалғанбыҙ. Һауа - ул ҡыҙ-ҡатын, ер - ул ир. Бөгөн кешелек йәмғиәтенең торошо ир-ат менән ҡыҙ-ҡатын араһындағы ҡаршылыҡтан ғибәрәт. Беҙ ерҙә лә, һауала ла түгелбеҙ. Ни өсөн? Бөгөнгө донъя йәмәғәтселегенең көсһөҙлөгө ҡыҙ-ҡатын менән ир-атты бер иш күреүҙән һәм ҡуйыуҙан килеп сыға. Уларға бер үк төрлө йән ҡуйылһа ла, тәбиғәт тарафынан һалынған маҡсат ике төрлө. Ҡыҙ-ҡатын бал ҡорто күсендәге инә һымаҡ иләүҙе ишәйтеүсе һәм көсәйтеүсе вазифаһын башҡарырға тейеш. Ошо шарт үтәлмәһә, күс тарҡалып бөтәсәк. Бөгөн иһә ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ, үҙҙәренең илаһи бурыстарын үтәү урынына, ир булырға тырыша. Был уларҙың салбар кейеүенә йә галстук тағыуына ғына ҡайтып ҡалмай. Тотош донъя буйынса ҡыҙ-ҡатын азатлығы өсөн көрәшкән феминизм тигән хәрәкәт бар. Ул хәрәкәттең маҡсатына тоғро булыусы ҡыҙ-ҡатындар бөтөнләйе менән тиерлек бала табырға теләмәй. Улар: "Ниңә беҙгә бала табырға? Ирҙәр тапмай бит", - тип иҫәпләй. XVIII быуаттың бөйөк мәғрифәтсеһе Жан Жак-Руссо бер романында: "Бөгөнгө француз ҡатындары тыуҙырыу менән балаларын имеҙмәй, имеҙеүсегә тапшыра башланы. Берәй йөҙ йылдан улар ғөмүмән бала табыуҙан баш тартмаҫ, тимәгеҙ", - тип яҙып ҡалдырған. Уның күҙаллауы дөрөҫкә сығып бара түгелме бөгөн?

**Әхмәр Үтәбай:** Диалектиканың "Изге урын буш булмай" тигән ҡануны бар. Әгәр ҙә "власть", "баш булыу" тигән буш вакант урын бар һәм ул урынды көслө һаналған ир-ат биләргә теләмәй икән, ул автоматик рәүештә ҡыҙ-ҡатын өлөшөнә ҡала. Ябай ғына миҫал: ире ғаиләһе өсөн аҡса таба алмаһа, ҡыҙ-ҡатын табырға мәжбүр. Ҡыҙ-ҡатын феминизмының нигеҙендә барыбер ҙә ирҙәрҙең көсһөҙлөгө ята түгелме?

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Бик күп быуаттар, меңәр йыллыҡтар буйына ирҙәрҙең мөҙҙәте бик сикләнгән булған. Ирҙәр бынан 10 мең йыл элек тә, хәҙер ҙә аҙыраҡ йәшәй. Улар донъяға килеүсе һәм китеүсе, дала буйлап атта елдереп үтеүсе генә. Улар көрәшселәр, яулаусылар, һунарсылар, илдән-илгә сабып йөрөүсе батырҙар, яугирҙәр. Шул арала ғына уларҙың күбеһе донъянан китеп бара. Ә ҡыҙ-ҡатындарға килгәндә, ниндәй генә аяуһыҙ һуғыштар булмаһын, уларға теймәгәндәр, уларҙы еңеүселәр үҙҙәренә ҡатын итеп алған, ҡол итеп һатҡан, әммә ҡыҙ-ҡатын бындай шарттарҙа ла тыуҙырыусы, ғүмер биреүсе булып ҡалған. Әлбиттә, был ҡанунды үтәмәүселәр ҙә булған, әммә ҡыҙ-ҡатын йәне барыбер ҙә аяулы һаналған. Бөгөн ҡыҙ-ҡатындарҙың бала табырға теләмәүен ирҙәрҙең көсһөҙ булыуына, йәшәү шарттары насар булыуға бәйләргә тырышалар. Был дөрөҫ түгел, сөнки йәшәү шарттары иң яҡшыһы һаналған илдәрҙә лә ҡыҙ-ҡатындар бала табырға теләмәй. Ҡыҙ-ҡатындарҙың үҙҙәрен ирҙәрҙән өҫтөн ҡуйырға тырышыуы глобаль сәйәсәткә әүерелде, һәм ул дөрөҫ түгел.

**Әхмәр Үтәбай: Клара Цеткин 8 мартты Халыҡ-ара ҡыҙ-ҡатындар көнө итеп билдәләй башлауға нигеҙ һалған. Ни өсөн фәҡәт ошо көндө һәм ошо 8 һанын һайланылар икән? Әгәр ҙә 8 һанын ятҡырып һалһаҡ, ул мәңгелек символын аңлата. Шул уҡ ваҡытта 8 биләнгән бәпәйгә лә, ҡар әбейенә лә оҡшаған. Горизонталь төҫмөрләнешендә был һан ҡыҙ-ҡатындарҙың түшен дә һынлай төҫлө. "Һигеҙ" һүҙе этимологик яҡтан "секс" менән дә ауаздаш. Шулай түгелме? Бында логика бармы?**

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Быны, әлбиттә, шаярыу тип ҡабул итәйек. Әммә һәр бер шаян логикала хәҡиҡәт орлоҡтары ла булыусан. Һәр бер мутлыҡтың төбөндә утлыҡ була. Ысынлап та, 8 билдәһе ике өлөштән тора. Уның өҫ һәм аҫ яғы бар. Өҫ яғы - ҡыҙ-ҡатын, йәғни Һауа символы, аҫ яғы - Ер, йәки ир-ат булмышы. Ҡыҙ-ҡатындың аҫҡы яғы - ерҙеке, йәғни ирҙеке, тигәнде лә аңлата был. Ҡыҙ-ҡатын ир ярҙамында өҫтән төшкән йәнгә һауыт-тән әҙерләй. Шулай итеп, 8 һанында ике түңәрәктең ҡушылыуы яңы кешене тыуҙырыуға, ике донъя асылынан яңы бер донъя барлыҡҡа килеүгә ишара. 8 һанында өҫкө донъя менән аҫҡы донъя ҡушыла. Бында "һигеҙ"-"секс" һүҙҙәренең бер мәғәнәүи тамырҙан сығыуын төҫмөрләп була.

**Артур Батыршин:** Вәлиәхмәт ағайға өҫтәп шуны әйтеп була: аҫтағы ир-ат символы менән өҫтәге ҡыҙ-ҡатын символын 8 һанында бер нөктә тоташтыра. Уны, Әхмәр ағай әйткәнсә, "секс", тип тә атарға булалыр. Ул ғына түгелдер, бәлки, ир-ат менән ҡыҙ-ҡатынды бер-береһенә бәйләүсе мөхәббәт символылыр ул нөктә. Минеңсә, халыҡ-ара "секс" һүҙен бары тик ҡушылыу тип кенә аңларға кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта өҫ яҡ менән аҫ яҡ бер генә нөктәлә киҫешә, һәм горизонталь киңлектә ул нөктә мәңгелекте барлыҡҡа килтереүсе ике тарафты бәйләүсе төп символға әүерелә. Ысынлап та, ике яҡтың ҡушылыуы мәңгелекте барлыҡҡа килтерә, йәғни ир менән ҡатындың ҡушылыуынан уларҙы дауам итеүсе бала барлыҡҡа килә.

**Әхмәр Үтәбай:** Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары бигерәк ҡырыҫ. Ҡапыл ғына уларҙың янына яҡынларлыҡ та түгел. "Эйе, шул ғына ҡалмағайны...", "Кит бар...", "Йөрөмә...", тип яндарынан ҡыуа башлайҙар. Был минең генә күҙәтеүем түгел, беҙҙең ҡыҙҙарҙың күңелен яулауы еңел түгел. Икенсе яҡтан, ҡыҙҙарыбыҙҙың ҡырыҫлығы милләтебеҙҙе һаҡлай торған сифат тип тә әйтәләр...

**Артур Батыршин:** Икенсе милләт ҡыҙҙарының еңел яуланғаны менән килешәм. Әммә еңеллек аусы егет күңелендә азарт, һунарсы ҡомары тыуҙырмай һәм еңел табылғандың ҡәҙере лә булмай. Шул уҡ ваҡытта башҡорт ҡыҙҙарының ҡырыҫ булыуы уларға ҡарата иғтибарҙы ла көсәйтә. Сөнки "Тыйылған - татлы", тиҙәр. Беҙҙең ҡыҙҙарҙы егеттәр йылдар буйы яулай һәм шул ваҡыт араһында егеттең ҡыҙҙарға тойғоһо көсәйә генә бара һәм улар ни тиклем оҙаҡ дуҫлашып йөрөһә, һуңынан төҙөлгән ғаилә шул тиклем ныҡлы һәм мөнәсәбәттәр тотороҡло булалыр, тип уйлайым. Ошонан сығып ҡарағанда, башҡорт ҡыҙҙарының ҡырыҫ булыуы уларҙың баһаһын күтәреүсе күрһәткес тә. Еңел яуланғандың ҡәҙере булмай.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Кешеләр донъяһында ла ҡатын-ҡыҙҙы ҡасандыр яулап ала башлағандар. Элек ҡыҙҙарҙы ҡатын итеп алыр өсөн хатта икенсе ырыуға, халыҡҡа яу менән барғандар. Кем батыр, көслө - ҡыҙ шуныҡы булған. Яу сабыуҙар заманы үткәс, ҡыҙ-ҡатынды яулауҙың бөтөнләй икенсе төрҙәре барлыҡҡа килгән. Ул да булһа - яусы ебәреү, унда ла "яу" тамыры һаҡланып ҡалған барыбер. Элек ҡыҙ-ҡатындың ризалығын һорап та тормағандар. Егет батыр икән, батырҙан батыр тыуа, тип ҡыҙҙы кейәүгә бирергә ашыҡҡандар.

**Әхмәр Үтәбай:** Хәҙер яуҙар һәм яусылар ваҡыты үтте, мөхәббәт йә иҫәп буйынса кейәүгә сығалар. Элек бит мөхәббәт буйынса кейәүгә сыҡмағандар йә өйләнмәгәндәр. Ике батырҙың бер үк ваҡытта тыуған ҡыҙы менән улының ҡолағын тешләткәндәр, ҡалымын түләгәндәр, аҙаҡтан ҡыҙ ҡолағын тешләгән егеткә кейәүгә бармаһа, ҡалымды малдың артҡан һаны менән кире ҡайтарырға тейеш булған.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Әгәр ҙә беҙҙең башҡорт донъяһы тик мөхәббәткә, йәғни романтик тойғоларға ғына ҡоролһа, беҙ әллә ҡасан мәңгелеккә барыуыбыҙҙан тайпылып киткән булыр инек.

**Әхмәр Үтәбай:** Шул уҡ ваҡытта донъяла ир-аттың ҡатын-ҡыҙға илаһи мөхәббәте империялар төҙөрлөк ҡеүәт биргән тарихи осраҡтарҙы ла беләбеҙ. Мин был турала яҙҙым инде. Мәҫәлән, Алтын-Урҙа империяһына нигеҙ һалыусы Темуджиндың-Сыңғыҙ хандың ятраҡан кәләшен меркеттәр урлап алып китә. Темуджин кәләшен кире ҡайтарыр өсөн ғәскәр туплап, меркеттәргә яу менән бара. Кәләшен кире ҡайтара, шул уҡ ваҡытта буласаҡ Сыңғыҙ хан ошо юлда көс туплап, икенсе илгә яу менән барыуҙың, уны еңеүҙең тәмен татып өлгөрә һәм ғәскәренең һанын тағы ла арттырып, башҡа ҡәбиләләргә яу саба башлай. Ошо нигеҙҙә йәйлап Алтын Урҙа империяһы барлыҡҡа килә.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Был осраҡта ҡыҙ-ҡатын яулауҙы башҡа илдәрҙе, донъяны яулауға тиң ғәмәл, тип тә әйтергә була.

**Артур Батыршин:** Шулай булғас, ниңә мөхәббәт юҡ тип әйтәһегеҙ һуң, ағайҙар?

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Әгәр ҙә мөхәббәткә аныҡ ҡына билдәләмә булһа, беҙ уның барлығын әйтә алыр инек. Бөгөн был хаҡта берәү ҙә әйтә алмай, мең йыл элек тә әйтә алмағандар. Мөхәббәткә йөҙ мең төрлө аныҡлама биреп була икән, ул төшөнсә юҡ.

**Артур Батыршин:** Улайға китһә, ғаләм, сикһеҙлек хаҡында ла берәү ҙә бер ни әйтә алмай, бәлки, улар ҙа юҡтыр. Бәлки, бына беҙ, шулар хаҡында һөйләшеп ултырыусылар ҙа юҡбыҙҙыр.

**Әхмәр Үтәбай: Артур, һин йәш быуын вәкиле булараҡ, беҙгә бер нәмәне аңлатып бир. Бына беҙ мөхәббәт буйынса һәм иҫәп буйынса никах төшөнсәләрен аңлай алмайбыҙ, улар ни яғы менән айырыла һуң?**

**Артур Батыршин:** Һүҙҙе ҡолағын тешләгән кейәүенең килеүен көтөп ултырған ун дүрт йәшлек ҡыҙҙан башлайыҡ. Һәр ҡайһыһы тик маҡтап ҡына иҫкә алған буласаҡ кейәүен көтөүсе ҡыҙ шул уҡ ваҡытта уның образына ғашиҡ була башлай. Ҡыҙҙың әле бер ваҡытта ла күрмәгән егеткә мөхәббәте уяна һәм быға тиклем уларҙың осрашыр мөмкинлеге булмағас, был тойғо көсәйә генә бара. Буласаҡ кәләше янына барырға йөрөгән егет тә ҡыҙға ғашиҡ булып өлгөрә. Шуға күрә бында мөхәббәт булмаған, димләп йә ҡолаҡ тешләтеп кенә өйләндергәндәр, йә кейәүгә биргәндәр, тип әйтеп буламы? Юҡ. Иҫәп буйынса кейәүгә сығыуға килгәндә, быны айырым осраҡтарҙа ғына күҙәтелгән күренеш, тип аңларға кәрәктер. Минең уйымса, тик тыуасаҡ балаларына мөхәббәте көслө булған ҡыҙ ғына иҫәп буйынса кейәүгә сығалыр. Ундайҙар иң тәүҙә балаларының ҡараулы, һау һәм киләсәкле булыуын теләп, хәлле кешене тормош юлдашы итеп һайлай. Иҫәп буйынса никахта ла мөхәббәт бар барыбер, ул да булһа, үҙенең киләсәгендә тәьмин иткән балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә мөхәббәт тойғоһо. Кем белә, бәлки, иҫәп буйынса кейәүгә сығыусы ҡыҙ был йәһәттән мөхәббәт буйынса кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙан күпкә бәхетлерәктер.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Башҡорт халҡында ҡыҙ-ҡатынға бик һаҡсыл ҡараш һәм мөнәсәбәт булған. Ҡыҙ бала гәүһәргә тиң булған, уны бик ҡиммәтле зат күреп тәрбиәләгәндәр. "Ҡыҙ" һүҙе үҙе үк ҡиммәтле нәмә тигәнде аңлата. Башҡорт ир-атының үҙ ҡатынына ихтирамлы мөнәсәбәте хаҡында урыҫ тарихсылары ла һоҡланып яҙып ҡалдырған.

**Әхмәр Үтәбай:** Килешәм, юҡҡа ғына "Ҡыҙ баламды ҡыҙғанам" йырында "Ҡыҙ балаҡай тыуһа, бәхете булһын, бәхете булмаһа, тыумаһын", тип әйтелмәйҙер. Тағы бер күренешкә иғтибар иттем: башҡорт халыҡ йырҙарының береһендә лә тиерлек (сеңләүҙәрҙән башҡа) әсәй һүҙҙәре осрамай тиерлек. Ғөмүмән, әсәйҙәргә бағышланған халыҡ йырҙары ла юҡ. Был нилектән шулай? Тимәк, элекке башҡорттар өсөн әсәй ул хатта һүҙ, моң менән дә ҡағылғыһыҙ, тейелгеһеҙ изге төшөнсә булғандыр, башҡорт кешеһе күңеленең иң мөҡәддәс урыны булғандыр, тип уйларға урын ҡала бында. Хәҙер башҡорт һәм татар эстрадаһында "әсәй", "әнкәй" һүҙҙәре һис бер хис тыуҙырмай торған тапанды төшөнсәләргә әйләнеп бара. Ҡөрьәндә "Ожмах - әсәйҙәрегеҙҙең аяҡ аҫтында", тип юҡҡа ғына әйтелмәйҙер ул, егеттәр.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Дөрөҫ әйтәһең, Әхмәр, иң ҡәҙерле һүҙҙе лә йыш ҡабатлай башлаһаң, уның ҡәҙере китә. Ҡыҙ-ҡатын ҡолағы менән ярата, тиһәләр ҙә, башҡорт ир-аттары бер ваҡытта ла ҡатындарына "Мин һине яратам,", "Мин һинһеҙ йәшәй алмайым", тип татлы телләнмәй. Ғөмүмән, беҙҙең ир-атҡа тәмле телләнеү хас түгел. Шуға күрә "башҡорт ирҙәре тупаҫ", тигән һүҙ менән килешеп булмай, киреһенсә, башҡорт ир-аты ҡыҙ-ҡатынға булған һөйөүен, тойғоһон әйтмәйенсә генә күңелендә һаҡлай белә. Шуға күрә лә, хөрмәтле ҡыҙ-ҡатындар, беҙ һеҙҙең алда һүҙгә һаранрыраҡ, өнһөҙөрәк, телһеҙерәк икәнбеҙ, был беҙҙең һеҙҙе яратмауыбыҙҙы аңлатмай.

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Хәҙер бер лаҡап һәм шунан сығып һорау. Бер ир һөйәркәһенә барған да, унда булғандан һуң ҡайтып киткән. Ирҙең хәләл ҡатынының зыйтына тейергә теләгән һөйәркә тегегә шылтыратып: "Ирең әле минең янда булды, хәҙер һинең янға ҡайта инде", - тигән. Ҡатын уға былай тип яуаплаған: "Эйе, мин был хаҡта беләм. Ул һиндә консультация үтә, ә имтиханды миңә бирә...", - тигән. Әлбиттә, был лаҡаптағы хәлдәр булмаған, әммә ошолай тип яуап биреүсе ҡатын аҡыллы ҡатынмы һәм ни өсөн ул аҡыллы? Был һорау - гәзит уҡыусыларыбыҙға.**

**Сәй эскәндә йүкә диктофонын Әхмәр ҮТӘБАЙ тоҡандырҙы.**

✓ *Алып киткән ҡыҙҙар донъя ҡотон, Илдә табылмағас лайыҡлы йәр. Лайыҡлы йәр бар ҙа, түшәгендә Ҡосағына аунар айныҡмы йәр?*




I

Емергән дә бар тынлыҡты,
Урам ҡорған пәрей туйын.
Бушҡа-юҡҡа йөрөмәйҙер -
Белһәң ине уның уйын.

Белһәң ине ен-пәрейҙең
Әллә туйы, әллә уйын...
Өй эсенә бикләнгән дә
Ҡамалған да ҡалған уйым.

Күҙ асҡыһыҙ был буранда
Ҡайҙа инде сығыу тышҡа.
Сиңерткәле мейес артын
Кетер-кетер итә сысҡан.

Эй кимерә, эй кимерә -
Әллә үҙем кимереләм...
Ен-пәрейҙең бөтмәҫ туйы,
Әллә өйөм емерелә.

Тәҙрәләргә туҡ-туҡ итә
Әллә айыу, әллә дейеү?
Ахырыһы, туйҙағылар
Йырҙан туйҙы, китте бейеү.

Китте таҡмаҡ, һүҙ әйтеше,
Һамаҡлашып һөйләшеүҙәр.
Әйтерһең дә, мин өйөмдә
Айыуҙарҙан ҡыҙ йәшергән.

Айыу халҡы, дейеү халҡы
Әүәҫ, тиҙәр, бындай эшкә.
Ләкәп йөрөй: имеш, улар
Ҡыҙҙар менән өйләнешкән.

Имеш, улар ҡатын-ҡыҙҙы
Наҙлап һөйә белә икән.
Сыр яланғас ҡатын-ҡыҙҙан
Ояла ла көлә икән.

Ана шундай ләкәп йөрөй
Беҙҙең яҡта - имеш-мимеш.
Имеш-мимеш түгел, бөгөн
Айыу, дейеү тере килеш...

"Беҙгә һеҙҙән ҡыҙҙар кәрәк..." -
Айыу, дейеү ҡыҙҙар һорай.
Улар мөрйә аша өрә -
Мейесемдә ҡуҙҙар илай.

Өй эсендә ҡыҙҙар илай -
Илай апай-һеңлеләрем.
Кәрәктәрен бирәсәкмен,
Өйгә генә инһен әле...

"Беҙгә һеҙҙән ҡыҙҙар кәрәк..."
Тәҙ(е)рәгә тағы туҡ-туҡ...
Мин уларға яуап бирәм:
"Ҡыҙҙар бында юҡ-юҡ, юҡ-юҡ..."

Тик тегеләр тағы туҡ-туҡ:
"Ҡайҙа апай-ҡарындашың?
Сығармаһаң тәҙ(е)рәндең
Ҡапҡастарын ярып асып...

Урлап алып китәсәкбеҙ
Өйөңдәге ҡыҙ йынысын".
Улар ҡаты дөбөрҙәтеп,
Алғас эсе һыҙғырышып...

Асылды ла китте күҙем.
Төштән өңгә ҡайтты уйым.
Төштән - өңгә... Тышта буран,
Тышта ысын пәрей туйы.

Ана-ана, кемдер килә -
Баҫып ала алпан-толпан.
Көн менән төн яғалаша,
Күҙ асҡыһыҙ аҡман-тоҡман.

II

Ергә йөмле яҙҙар килде,
Үтте март бурандары.
Умырзая баш ҡалҡыта,
Уяна урмандарым.
Ай-һай,
Һай-вай -
Уяна урмандарым!

Ҡыштың биле һынды инде,
Үтте март бурандары.
Туғайлыҡтар тик йәшелдән
Йәйҙеләр юрғандарын.
Ай-һай,
Һай-вай -
Йәйҙеләр юрғандарын!

Ғашиҡ булыр мәлдәр етте,
Үтте март бурандары.
Тик ҡыҙҙарһыҙ тороп ҡалған
Ауылым урамдары
Ай-һай,
Һай-вай -
Ауылым урамдары!

Аҡман-тоҡман алты көн дә
Алты айҙан ҡаты көн.
Кәләш ала алмайынса,
Килер микән ҡартлыҡ көн?
Ай-һай,
Һай-вай -
Килер микән ҡартлыҡ көн?!

III

Ауылымда утыҙ егет йөрөй,
Айыу тотоп менер утыҙ батыр.
Кәләштәрен төштәрендә күреп,
Утыҙ торған саҡта, утыҙ ятып.

Исмаһам да, ҡояш тотолһасы,
Һис юғы бер айы тотолһасы!
Көнө-төнө хәсрәт - йоҡо алмай,
Һағыштарҙан йоҡлап ҡотолһаңсы.

Яңғыҙлыҡтан йоҡлап ҡотолһаңсы,
Төштәреңдә күреп кәләшеңде.
Күргән килеш мәрткә китһәң ине,
Мәңгелеккә, тиеп, йәрәшерлек.

Тәмәкеләр көйрәй, баштар сатнай -
Нигә баҫмай ерҙе ҡараңғылыҡ?
Ерҙә, гүйә, утыҙ йондоҙ яна,
Йондоҙ янған ерҙә яралғы юҡ.

Ел бөүелтә ҡыҫыр болоттарҙы,
Буш сәңгелдәк кеүек ҡыҫыр болот...
Ямғыр болоттарҙың юрғандары
Әллә кемдән ҡалған туҙҙырылып.

Йәшен-һөйөү ҡайҙа йәшеренгән,
Әллә теге буран касафаты?..
Һунынан бер донъя үртәмәҫме,
Ҡаф тауына барып, ҡасып ятып?

Әллә инде теге айыу, дейеү
Урлағанмы донъя бәрәкәтен?
Яралғыһыҙ ҡалған ауылымдың
Туҡтар микән бер саҡ хәрәкәте?!

Һаҡалдары билдәренә еткән
Айыу тотоп менер утыҙ батыр,
Һәр береһе ҡарашынан ерҙә
Утһыҙ яныр утта ун ҡыҙ, балҡыр.

Ҡот ҡунмаған ерҙә генә бәндә
Көн хаҡына йортон, ҡотон һатыр...
Ер күсәрен күсерергә әҙер -
Ауылымда йөрөй утыҙ батыр.

Утыҙҙары үтеп ҡырҡҡа китеп,
Утыҙ егет йөрөй алпан-толпан.
Ямғыр ҙа юҡ, ел дә, төн яп-яҡты,
Күңелдәрен өтә аҡман-тоҡман.

IV

-... Һыйыр һауаһы түгел дә,
Һыуға бараһы түгел.
Хәҙер беҙ бит ҡаланыҡы,
Ауыл балаһы түгел.

-Ауылымдан киткән саҡта
Ҡараманым боролоп.
Үҙәгемә үтте инде
Шул ауылы, ҡороғор.

-Ауылда ҡал, тигәйнеләр,
Ҡалып торманым инде.
Сафлығымды бер ышпана
Күптән урланы инде.

-Кисә килде ике егет,
Береһе әрмән икән.
Әрмәненә күҙем төштө,
Ҡәҙимгә "карман" икән.

-Ауылымдағы беҙҙекеләр
Торғаны мәмәй инде.
Хәҙер инде бөттө башым,
Бөтөнләй һемәйелде.

-Ятағыбыҙ вахтаһында
Өҙөлмәй яусы аты.
Көн дә берәү килеп китә,
Һылтауы - тансаға, тип.

-Бөткән башым бөткән инде,
Киткән баш киткән инде.
Һөйгәнемде көтә-көтә,
Күҙ йәшем кипкән инде.

-Ауылымды төштәремдә
Күрһәм, ҡурҡып уянам.
Ҡабат уны күрмәҫ өсөн,
Йоҡламайым, уйланам.

-Һарыға һабыша таңым -
Һары булһа ла ярай.
Юҡ башҡортто ҡайҙан алаң,
Мари булһа ла ярай.

-Бейек тауға менгән саҡта,
Сандалийҙарым тая.
Хәҙер Зоя булдым инде,
Зөлфиә инем бая.

-Ә мин Гуляға әйләндем -
"Гулять" һалдыра торғас.
Таңһыҡбикә - Таня инде,
Таңһыҡ ҡандыра торғас.

-Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре иҫемдә.
Тетелерем тетелгән дә
Ишеләрем ишелгән.

-Ҡалаларға килгән инем,
Ҡала матур тигәнгә.
Хәҙер инде ҡайтыуҙар юҡ,
Иләнерем иләнгән.

V

Нигә инде таңдар һарыларға
Һабыштырып, уйға һалып киткән?!
Алһыулығын уның йөҙҙәрендә
Ҡалаларға ҡыҙҙар алып киткән.

Нигә икән ҡояш ҡалҡыр-ҡалҡмаҫ,
Таңғы үләндәрҙә ысыҡ кипкән?!
Таңғы ысыҡ - ҡыҙҙар күҙ йәштәре,
Ҡалаларға улар сығып киткән.

Нигә тиһең, үҙем беләм, тиһең,
Ҡалаларға ҡыҙҙар ҡасып киткән?!
Егеттәрҙең өмөт-хыялдарын
Буш сәңгелдәк итеп аҫып киткән.

Аҫылынып торған өмөттәрҙе
Ҡыҫыр болоттарҙың биләүенә.
Гүзәллеге киткән ауылымдың,
Гүзәл заттар киткәс иләүенән.

Алып киткән ҡыҙҙар донъя ҡотон,
Илдә табылмағас лайыҡлы йәр.
Лайыҡлы йәр бар ҙа, түшәгендә
Ҡосағына аунар айныҡмы йәр?

Әллә шуға үҫ итепме киткән -
Имеш, ҡалаларҙа алтын кейәү...
Кейәү алтындыр ҙа, ят бауырҙың
Йолалары башҡа - һалҡын тейәр.

Һалҡын үткәс кенә әйткән булыу:
"Яҙмышҡайым булды ҡыҙғаныс", - тип.
Ауылына ҡунаҡҡа тип ҡайтҡас,
Балалары әйтер: "Здырасти?.." - тип.

Алып киткән ҡыҙҙар инсафлыҡты,
Инҙәрендә киткән егәрлелек.
Билдәрендә нәзәкәтлек киткән,
Илаһилыҡ ҡалған емерелеп.

Бейек тауҙар ҡалған теҙгә сүгеп,
Мөхәббәтлек киткән түштәрендә.
Ҡайындарҙың шәрә ботаҡтары
Ҡыҙ сәстәрен күрә төштәрендә.

"Сафлығым тик, тик берәүгә..." - тиеп
Өләшеүҙәр уны һаран ҡылыҡ.
Ҡыҙҙар менән асылмайса киткән
Сафлыҡ тигән "серле ҡараңғылыҡ".

Ҡыҙҙар менән әйтелмәйсә киткән
Күпме егеттәрҙең йөрәк һүҙе.
Яҙылмаған күпме шиғыр киткән -
Эх, яҙырға хәҙер кәрәк үҙең...

Алып киткән ҡыҙҙар шат моңдарҙы,
Тороп ҡалған бары һағыш-көйөк,
Кис булдымы, ир-ат эскәмйәлә
Шул көйөктө көйләй байғош кеүек.

Тауыҡ кисеүендәй Һаҡмар ҡалған -
Ҡайҙа, тиһең, һыуы ағып бөткән?
Ҡыҙҙар уны инбашына элеп,
Көйәнтәләп ташып алып киткән.

Йәйге аҡ кистәрҙең йылылығын
Алып киткән ҡыҙҙар ҡуйынында.
Яҡтылығы- күрер төштәрендә,
Бергә киткән хистәр уйымында.

Улар менән милләт үҙе киткән,
Тыуыр бала киткән ҡарынында.
Һис юғы бер өмөт ҡалдырмаған,
Ҡыҙҙар алып киткән барыһын да.

VI

Ҡыштың һуңғы көрһөнөүе,
Яҙ суҡышы күренеүе.
Бар донъяны ҡаҡҡан-һуҡҡан
Ауылымда аҡман-тоҡман.

Тәбиғәттең ҡарт бураны,
Уралымдың март бураны.
Йөрөй инең алпан-толпан,
Ҡайҙа булдың, аҡман-тоҡман?

Әллә башҡа караптарҙа
Киттең башҡа тарафтарға?
Юлландыңмы, атҡан уҡтай,
Уралымдан, аҡман-тоҡман?

Артыңдан бит ҡыҙҙар китте,
Һөйөү үҙе, йырҙар китте...
Боролһаңсы атлап-туҡтап
Уралтауға, аҡман-тоҡман?!

Ҡайталмаһаң үҙең әгәр,
Тик ҡыҙҙарҙы иллә-мәгәр...
Ҡамсың менән һайтлап-туҡмап,
Ҡайтарһаңсы, аҡман-тоҡман?!

1996 й.



# КӨМӨШ ЙӨҘӨК - ҠУЛ КҮРКЕ,

## нағышлы һаҡал - түш күрке

(Башы 1-се биттә).

Башҡорт халыҡ биҙәүестәре байрам өсөн генә түгел, көндәлек тормошта ла ҡулланылып, кейемгә үҙенсәлекле балҡыш өҫтәгән. Баш һәм өҫ кейемендәге тәңкә, мәрйен һәм башҡа ҡиммәтле таштар ғаиләнең хәлле булыуы, уның йәмғиәттә тотҡан урыны тураһында һөйләгән. Унан һуң, был әйберҙәр биҙәүес формаһын ғына үтәмәгән, ул милләттең үҙенсәлекле йөҙөн дә билдәләгән. Мәҫәлән, һаҡалды тик башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ғына таҡҡан.

Һаҡал ҡатын-ҡыҙ костюмының иң сағыу һәм затлы биҙәүесе булып тора. Былдай биҙәүестәр хатта яҡын-тирә халыҡтарҙа ла юҡ. Мәрйен, тәңкә, фирүҙә таштар менән байытылған һаҡалдар бик ҡиммәт булыуына ҡарамаҫтан, һәр гүзәл затта тиерлек булған. Һаҡал, формаһы, биҙәлеш төрө һәм төбәгенә ҡарап, төрлөсә аталып йөрөтөлгән. Мәҫәлән, мәрйендән төҙөлгәне селтәр тип атала һәм ул һаҡалдың аҫҡы өлөшөн тулылындыра. Уның өҫтөнән сулпылар ҡуйыла. Былдай һаҡал көньяҡ-көнсығыш төбәктә йәшәгән башҡорттарға хас булған, һәм өс-дүрт рәт сулпы төшкән селтәрҙәрҙе бөрйән, түңгәүер, үҫәргән башҡорттары таҡҡан. Ә бына төньяҡҡа тартым, Учалы, Белорет яғында тәңкәләр һаны арткан һәм ул һаҡалдың урта өлөшөн тәшкил итеп, ун ике рәткә тиклем барып еткән. Был һаҡалдар бик ауыр булған, хатта 2 килограмға тиклем тартҡандары булған. Мәрйен селтәргә төҫлө сәйләндән үрелгән ҙур булмаған биҙәктәр төшөүе тамъян башҡорттары һаҡалын айырып тороусы төп һыҙат. Шулай уҡ арҡа өлөшөн дә ҡаплап торған һаҡалдар булған. Ул яғаинһәлек тип атала. Бәләкәй генә тәңкәләр, мәрйен, диңгеҙ ҡабырсаҡтары теҙеп эшләнгән был кейем биҙәүестәре үткән быуаттың 50-60-сы йылдарында Силәбе, Ҡурған башҡорттарының бик күп ҡатын-ҡыҙҙарында булған һәм улар уны байрамдар ваҡытында тағыр булған. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш ҡатын-ҡыҙҙар кейемен муйынса тип аталған һаҡал төрө тулыландырған. Был яҡтарға мәрйен ҡулланыу хас булмаған. Туҡыма өҫтө тәңкәләр менән ҡапланған. Һаҡалдың тирә-яғы сылбыр, төрлө тәҫтәге быяла, мәрүән төймәләр менән биҙәлгән. Төньяҡ һәм көнбайыш башҡорттары металдан тыш, йәшмә, һырланған быяла йәки шымартылған сердоликтан эшләнгән муйынса ла таҡҡан. Урал арьяғында мәрйен муйынсалар киң таралыу алған. Был һаҡалдарҙың төрлө размерҙа - ҡыҫҡалары, билдән аҫҡа тиклем төшөп торғандары ла булған. Мәҫәлән, меңле башҡорттарының бер ни тиклемендә һаҡал бәләкәй генә булған. Ул оҙонлого менән 20 сантиметрҙы тәшкил итеп, күлдәктәге түш уйымын саҡ ҡаплап торған.

Ун туғыҙынсы быуатта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарында алмиҙәү йәки башкиҙәү тигән һаҡал төрө булған. Ул туҡымаға көмөш, тимер, аҡыҡ таштар ҡуйып эшләнгән. Уны элек Бөрйән, Баймаҡ һәм уларға яҡын-тирә райондарҙа ҡыҙҙар йөрөтһә, быуат аҙағында өлкән ҡатындарҙың кейем элементына күскән. Төньяҡ һәм көнбайыш райондарҙа түшкә таға торған дәүәт, эмәйҙек, хәситә тигән биҙәүес йөрөткәндәр. Тәңкә, мәрйен, сәйлән менән биҙәлгән был әйберҙә бер ҡул башынан арҡыры билгә табан төшөрөп таҡҡандар. Доға яҙылған күн һәм металдан эшләнгән бәләкәй генә бетеүҙәр ҙә декоратив элемент булараҡ инеп киткән. Ул, ғәҙәттә, ситкәрәк, күлтыҡ аҫтына табан тегелгән һәм яман күҙҙәрҙән һаҡлап торған. Былар барыһы ла ҡатын-ҡыҙға күркәмлек өҫтәгән, нәзәкәтле итеп күрһәткән. Был биҙәүестәр электән килгән өлгө буйынса эшләнһә лә, һәр ҡатын-ҡыҙ уны үҙенә генә хас фантазия, зауыҡ менән ҡабатланмаҫ нағыш һалып башҡарған.

Баш биҙәүестәренә килгәндә, уға алҡа, сәсүрмәс, сулпылар ингән. Йола буйынса ҡыҙҙар сәсен икенән үреп, әммә уның остарын бергә ҡушып ҡуйыр булған. Йөндән йәки ат ялынан ишеп эшләнгән бау ҡаралыҡ сәсүрмәс булараҡ хеҙмәт иткән. Башҡортостандың көньяҡ һәм көнсығыш райондарында ҡыҙҙарҙың елкәлек, елкәмәс кеүек махсус елкә биҙәүестәре булған. Туҡыма, тула йәки күндән торған был биҙәүес әйберҙәре мәрйен, сәйлән, мәрүәт төймәләр, тәңкәләр менән нағышланған. Шулай уҡ сәсүрмәстең уртаһына доға яҙылған күн бетеү ҙә ҡуйылған. Елкә биҙәүестәре менән бергә ҡыҙҙар суҡтар, мәрйендәр ҡуйылған ҡара йәки төҫлө йөн ептән эшләнгән сәсүрмәс йөрөткәндәр. Былдай суҡлы ишелгән ҡаралыҡтар бигерәк тә Силәбе, Ҡурған ҡыҙҙарына хас булған. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары елкәлек менән бергә мәрйендән торған сәсмауҙы ҡушып үргән. Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында сәсҡап йәки арҡалыҡ тигән толом биҙәүесе киң таралған. Ул буй туҡыманан ике-өс рәт тәңкә тегелеп, аҫҡа сулпы тағып эшләнгән. Елкә тирәһендәге өҫкө өлөшөнә сердоликтан йәки төҫлө быяланан айыл ҡуйылған. Оло йәштәге ҡатындар сәстәренә сулпы тағылған таҫма ҡушып үргән. Сәстәрен ҡаплап тороусы яулыҡ аҫтынан ауыр сулпы йәки тәңкәләр күренеп торор булған. XIX быуат аҙағы - XX быуат башында башҡорт ауылдарында үҫемлек һүрәте төшөрөлгән өс-дүрт һынлы пластиналарҙан бер-береһенә ҡулсалар менән беркетелгән сулпылар киң таралған. Сулпылар ишле итеп тағылған.

"Алҡаны ҡатын-ҡыҙҙар, бигерәк тә илдең көньяҡ-көнсығыш яртыһында, бик аҙ тағалар", - тип әйтеп киткән С.И. Руденко. Кейәүҙә булған ҡатын-ҡыҙҙар яулыҡты сәстәрен һәм муйындарын ҡаплап торорлоҡ итеп ябынғанға күрә, алҡаны бик таға һалып бармаған. Унан һуң ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш кейеменең ҡолаҡ тирәһенә сулпы тағылыр булған, шуға өҫтәп алҡа тағыу кәрәк булмаған. Алҡа ике төрҙә: ҡулса йәки ярым ай формаһындағы бәләкәй, шулай уҡ тәңкә тағылған йәки сулпылы оҙон алҡалар булған. Тәүгеләре Башҡортостандың төньяғына һәм көнбайышында, икенселәре көньяғында, бигерәк тә көнсығышында күберәк өҫтөнлөк иткән. Алҡалар аҡыҡ, фирүҙә, быяла таштар ҡуйып эшләнгән.

Боронғо ҡатын-ҡыҙҙарҙа ҡашмау бик матур һәм зауыҡлы күренгән. Уның баш өлөшөнөң тирә-яғына ҡусҡарҙар тегелә, ә урта өлөшө берәй орнамент рәүешендә сәйлән менән биҙәлә. Ҡаптырмаға мәрйен, тәңкәләр тағыла.

Көмөштән эшләнгән йәки алтын ялатылған тәңкәләр, ҡаптырмалар өҫ кейемдәрен биҙәү өсөн дә ҡулланылған. Әйтәйек, еләндә аҡыҡ, күкһел кварц, фирүҙә, цитрин, аметист кеүек ҡиммәтле таштар менән биҙәлгән, пластмасса, быяла ҡуйып эшләнгәндәре лә булған. Шулай уҡ камзул өсөн ҡарайтылған көмөштән эшләнгән ҡаптырмалар булған. Сулпылы яға ҡаптырмаһы колоритлы һаналған һәм унда ысынлап та бер үк ваҡытта көмөш, аҡыҡ, тау гәлсәре, аметист, фирүҙә, гранат, быяланы күрергә мөмкин. Беҙҙә уның алтын ялатып эшләнгәне лә бар.

Шулай уҡ ирҙәр ҙә ҡәмәр һәм ҡайыш ҡаптырмалары кеүек кейем биҙәүестәре таҡҡан. Ҡәмәр туҡымаға көмөш, тимер менән семәрләнеп, быяла, фирүҙә айылдар менән биҙәлһә, көмөштән торған йәки алтын ялатылған ҡайыш ҡаптырмалары топаз, быяла менән баҙыҡландырылған. Борон был билбауҙар бик ҡиммәт торған, хаҡы буйынса ике үгеҙ йәки яҡшы арғымаҡ менән баһаланған.

Ювелир әйберҙәренә килгәндә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йөҙөк, балдаҡ, беләҙек кеүек ҡул биҙәүестәрен яратып ҡулланған. Ун туғыҙынсы быуаттың икенсе яртыһына ҡараған йөҙөктәрҙә көмөш, фирүҙә, быяла, аҡыҡ, кварц өҫтөнлөк итә. Алтын ялатып эшләнгәндәре лә бар. Беләҙектәр ике төрлө булған. Улар - ялғаулы беләҙек һәм яҫма беләҙек. Бигерәк тә яҫма беләҙектәр киң ҡулланылған. Көмөш, ҡарайтылған көмөштән эшләнгән беләҙектәргә тау гәлсәре, фирүҙә, быяланан ҡаштар ҡуйылған. Алтын ялатылғандары ла булған. Көнсығыш традицияһына таянып, боронғо ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ беләҙектәрҙе ҡушлап таҡҡан. Улар бәхет һәм сәләмәтлек килтерергә тейеш булған. Беләҙектәргә ҡара менән менән күп төрлө орнаменттар төшөрөлгән, ғәрәп хәрефтәре менән яҙыуҙар уйып яҙылған. Ҡайһы саҡта уларҙа беләҙек хужаһының исеме лә яҙылыр булған. Музейҙа хатта "4 март 1881 йыл" тигән яҙыулыһы бар.

Биҙәүестәрҙә беҙ көмөш, мәрйен, сердолик, диңгеҙ ҡабырсаҡтары өҫтөнлөк итеүен күрәбеҙ. Уларҙы юҡҡа ғына ҡулланмағандар. Боронғолар Ислам дине килеп ингәнгә тиклем был металл һәм таштарҙың тылсымлы көсөнә ышанған. Көмөш һаҡлаусы, таҙартыусы көскә эйә һәм металдың ҡарайыуы организмдан сирҙәр сығыуы менән аңлатылған. Уның сыңы яуыз көстәрҙән һаҡлай, тип ышанғандар. Тап шуғалыр ҙа, биҙәүес әйберҙәрҙәрендә тауыш биреүсе сулпылар күп. Мәрйендәр уңыш һәм байлыҡ менән тәьмин итергә тейеш булған. Сердолик элек-электән көнсығышта бәхет ташы иҫәпләнгән. Һинд океаны ярынан алынған диңгеҙ ҡабырсаҡтары ла күҙ тейеүҙән, сихырҙан һаҡлаусы булараҡ ҡулланылған.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Беҙҙең халыҡ бер ваҡытта да алтынға бик үк ҡыҙыға һалып бармаған. Көмөш биҙәүестәр эстетик зауыҡты ғына билдәләп ҡалмаған, экологик яҡтан һаҡлаусы функция үтәгән. Биҙәүес кешенең кәйеф торошон, уңышҡа ынтылышын күрһәткән, мәрйендәр, сулпылар боронғо ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙа үҙ көсөнә ышаныс уятҡан, үҙен хәүефһеҙ итеп тойорға мөмкинлек биргән. Сулпы сыңы ҡатын-ҡыҙҙы кәрәкмәгән һүҙҙәр ишетеүҙән, уңайһыҙ хәлгә ҡалыуҙан да аралаған. Әйтәйек, тәңкә сылтырауы ир-егеттәргә яҡында ҡатын-ҡыҙ йөрөүен белдерткән.**

**Бөгөн иһә, халҡыбыҙҙың көмөш биҙәүес әйберҙәренең боронғо өлгөләре музейҙарҙа һаҡланһа ла, уның нигеҙендә яңыса балҡыш алған төрҙәре кейем элементтарына ла, биҙәүес әйберҙәре булараҡ та ҡулланылышҡа ҡайта башлауы ҡыуаныслы. Учалы ювелир оҫталары эшләгән көмөш алҡа, йөҙөк, беләҙек, муйынсаларҙы сәхнә, телеэкран йондоҙҙарында ғына түгел, ябай тормошта ла милли колорит менән зауыҡлы кейенергә яратҡан гүзәл заттарҙа ла йыш осратабыҙ. Ысынлап та, кейем беҙҙең йөҙҙө билдәләһә, биҙәүес әйберҙәре беҙҙең рухи донъябыҙ тураһында һөйләй. Тимәк, беҙ милли асылыбыҙға, рухи булмышыбыҙға ярашлы күренергә тейешбеҙ.**

Динара ЯҠШЫБАЕВА
яҙып алды.

ШАЯРТЫУ ҠАТЫШ...

## ҠАТЫН МЕНӘН ИР: Ике сер һәм сир

Ҡатын-ҡыҙҙан ир тормошо
Әйләнә бер бәләгә.
Ә уларһыҙ ир-аттарға
Тормош юҡ бөтөнләйгә.
* * *
- Әйтсе, йәнем, һинең миңә тиклем
Кемең булды? Һөйлә шуларҙы.
- Уф, аллаҡай, нинә был егеттәр
Бирәләр гел бер үк һорауҙы.
* * *
- Күпме егеттәр йүгерҙе
Кире ҡаҡтым бөтәһен дә.
- Их, йәшлектә булһам икән
Мин дә шулар рәтендә!
* * *
- Миңә былай ҙа оҡшайһың,
Биҙәнмәһәң дә ярар.
- Үҙеңде генә уйлама,
Эштә лә бит ирҙәр бар.
* * *
Ҡатын-ҡыҙға ир-ат бит ул
Еткә ырғытҡан һөйәк:
Талай ҙа талай - йоталмай,
Ташлар ине - йәл, кәрәк.
* * *
- Сибәрҙәрме, аҡыллымы -
Ҡай ҡатын оҡшай һиңә?
- Ундайҙар һис тә оҡшамай,
Һиндәйҙәр оҡшай миңә.
* * *
Төркөм-төркөм ҡатын-ҡыҙҙар
Килгән бер саҡ Хоҙайға:
Маңлай һырҙарын табанға
Күсереүҙе һорарға.
* * *
Ирҙәр, хатта бик ҙур илдәр
Татыулаша үҙ-ара.
Өс ҡатынды, талашһалар,
Бар, тыйып, тотоп ҡара!
* * *
Ҡатын-ҡыҙҙар йәшәрергә
Үҙ йәшен нык йәшерә.
Тик юғалтмай: уны ҡуша
Әхирәте йәшенә.
* * *
Артисткалар, шағирәләр,
Аңлағанығыҙ һирәк:
Ир-атҡа талант кәрәкмәй,
Хужабикәләр кәрәк!
* * *
"Һинән дә сибәр юҡ!" - тиеп
Маҡтағыҙ ҡатын-ҡыҙҙы:
Ҡыуаныстан ғәфү итер
Бөтә гонаһығыҙҙы.
* * *
Ҡатын-ҡыҙҙың йөҙ-ҡүҙҙәрен
Бик нык маҡтағанында,
Онотоп ҡуйма, егеткәй,
Уның аяҡтарын да!
* * *
Үҙ ҡатыныңа мөхәббәт
Эш хаҡына оҡшаш ул:
Ай һайын түләһәләр ҙә,
Уға йәшәп булмай шул.
* * *
Ҡатының сибәр булмаһа,
Ҡайғырма - матурҙар бар.
Ҡатының бик сибәр булһа,
Һаҡ йөрө - батырҙар бар!
* * *
-Мәмдүҙәнең ире ниндәй!
Ул - әүлиә, ул бит Алла!
Иртән эшкә оҙатып ҡуя,
Ә кистәрен ҡаршы ала!
- Һинең кеүек, күптән инде
Ошо хаҡта уйлап торам:
Мин дә шулай итер инем,
Мәмдүҙәнең ире булһам!
* * *
Ҡатынға - ир, иргә - ҡатын
Кәрәклеге иҫбатлана:
Ҡатын-ҡыҙҙар - иҫәрләнә,
Шунһыҙ ир-ат - ахмаҡлана.

**Риф МИФТАХОВ.**

АҺ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!



**Әле бәләкәй генә сағымда әсәйемдең ҡустымды алдаштырып, "ҡоҙа, ҡоҙа", тип ҡалаҡлап аҙыҡ ҡаптырғаны хәтерҙә. Нимәһе ҡыҙыҡ: ашауға бик барымы булмаған ҡустым был хәйләгә "ҡаба" торғайны. Ә мине икенсе һорау борсой ине. Кем ул ҡоҙа? Ни өсөн әсәйемдең ихласлап өгөтләүенә ҡустым тиҙ генә бирелә икән? Тимәк, ҡоҙа - ҡәҙерле, ихтирамлы, яҡын кеше буламы? Әлеге һөйләшеүҙә ошо һорауҙарға яуап эҙләп, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар мөнәсәбәте хаҡында һүҙ алып барҙыҡ та инде. Сәй табыны артында ике ҡоҙағый - Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Рива Авзал ҡыҙы ИСХАКОВА һәм Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының башҡорт теле уҡытыусыһы Тәнзилә Яҡуп ҡыҙы БИКБАЕВА ҙур кинәнес менән бәйнә-бәйнә эс серҙәрен түкте.**



# ҠОҘАҒЫЙҘАР МӨНӘСӘБӘТЕ...

## ихласлыҡтан ярала

**Ғәҙәттә, егет кеше кәләшен әсәһенә оҡшатып алһа, ҡәйнәнең дә кейәүен яҡынырaҡ күреүен беләбеҙ. Һеҙ килен-кейәүҙәрегеҙҙе нисек ҡабул иттегеҙ?**

**Рива ИСХАКОВА:** Улым Рияз Йәмилә киленде таныштырырға тип тәүге тапҡыр алып ҡайтҡанда уҡ үҙ ҡыҙым кеүек күңелгә ятты ла ҡуйҙы. Бик баҫалҡы, ипле, инсафлы, тәрбиәле бала. Быныһы инде ҡоҙағыйымдың тәрбиәһенән киләләр, тип уйлайым. Минең ҡоҙағыйым бик егәрле, ныҡышмалы, маҡсатҡа ынтылыусан кеше. Ғәҙәттә, килен ҡәйнә тупһаһынан яралһа, ғаилә матур, яҡшы йәшәй, тип уйлайым мин. Ә Йәмиләне күптәр миңә оҡшата.

**Тәнзилә БИКБАЕВА:** Беҙҙең халыҡта ир-ат ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда юғары дәрәжә йөрөтә һәм беҙ уларға өҫтөнлөк бирергә тырышабыҙ. Уны беҙ ғаилә башлығы, һине ҡурсалаусы, мал табыусы, тип беләбеҙ, шул уҡ ваҡытта ҡатын-ҡыҙ бәхете ирҙән икәнен дә онотторға ярамай. Шулай булғас, кейәү кешегә айырыуса мөнәсәбәт булыуы тәбиғи. Мин дә үҙемдең кейәүемдә ихтирам итәм. Ул һәр ваҡыт ижади фекер йөрөткән бик аҡыллы, тәрбиәле, инсафлы кеше.

Ә ҡыҙымды мин һәр ваҡыт буласаҡ ҡәйнәңдә лә мине яратҡан кеүек ярат, ихтирам ит, тип өйрәттем. Сөнки минең үҙ бейемем менән дә мөнәсәбәтем шулай яҡшы булды, бер ваҡытта ла уның менән һүҙгә килешкәнем булманы, уның миңә бер тапҡыр ҙа ауыр һүҙ әйткәнен хәтерләмәйем.

**Ҡоҙағыйҙар үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәте менән улы һәм ҡыҙының ғаилә нигеҙе ныҡлығын тәьмин итә аламы?**

**Рива ИСХАКОВА:** Беҙҙең ғаиләләр рухи байлыҡты өҫтөн ҡуя. Шул яҡтан беҙ бигерәк тап килгәнбеҙ. Әйтәйек, мин тик матди байлыҡ туплау яғын ғына уйлап торһам, киң күңелле, яҡты уйлы ҡоҙағыйым менән беҙ уртаҡ тел таба алмаҫ инек. Ҡоҙағыйым уҡытыусы, ә мин сәнғәт кешеһе булһаҡ та, беҙҙең ҡараштарыбыҙ, фекерҙәребеҙ тап килә. Беҙ уның менән сәғәттәр буйы һөйләшеп ултыра алабыҙ, һәр эштә кәңәшләшеп торабыҙ, ҡайһы бер мәсьәләләрҙе икәү ара ғына һөйләшеп, хәл итә һалабыҙ. Иң мөһиме, беҙ балаларыбыҙ өсөн йәшәйбеҙ. Әгәр улар татыу, матур итеп йәшәй икән, беҙҙең арала бер ниндәй ҙә ауырлыҡ һәм ҡыйынлыҡ булмаясаҡ. Ихласлыҡ, ихтирам, тоғролоҡ кеүек төшөнсәләр беҙҙең халыҡта ныҡ көслө. Ошолар булғанда, ғаиләлә татыулыҡ һаҡланасаҡ.

**Тәнзилә БИКБАЕВА:** Ғаиләлә атай-әсәй мөнәсәбәте, уларҙың күңел донъяһы ниндәй, бала ла шуға ҡарап үҫә. Әйтәйек, әсәй кеше ҡатыраҡ күңелле булһа, балаһына артыҡ йылылыҡ, йомшаҡлыҡ күрһәтмәһә, һөймәһә, ул бала ошоға ҡалыплаша. Ул наҙҙы ят итә һәм үҙе лә ҡырыҫ булып үҫә. Ә инде буй етеп, йәшлек ҡорона инеп, йөрәгендә һөйөү уты ҡабынғас, ул бөтөнсәрәк мөхиткә барып инә. Дуҫиштәре араһында матур һүҙҙәр ишетеп, йылы мөнәсәбәт тойоп, шундай кинәнесле, ирекле, матур донъя барлығын күреп, баҙап ҡала. Ул былдай көтөлмәгән йомшаҡлыҡҡа алданыуы, йә иһә үҙе лә артыҡ татлы теллеләнеп китеүе ихтимал. Шуға күрә лә беҙ балаларыбыҙҙан йөрәк йылыбыҙҙы йәлләргә тейеш түгелбеҙ. Беҙ уны теләп тыуҙырабыҙ, йылы күкрәк һөтө менән үҫтерәбеҙ һәм артабан да ошо йылылыҡтан өҙөргә ярамай. Ҡош себештәре лә бит йылы еткәндә генә морон төртә. Ә кешелек был йылыға барыһынан бигерәк мохтаж. Шуға ла мин үҙемдәге йылылыҡты ғаиләмә, туғандарыма, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарыма ла еткерергә тырышам. Туғандарса мөнәсәбәт ана шундай ихлас аралашыуҙан ҡорола инде ул.

**Рива ИСХАКОВА:** Миңә ҡалһа, ғаилә дуҫ, татыу булһын өсөн атай-әсәйҙәрҙе айырып ҡарарға ярамай. Мин үҙем һәр ваҡыт иремдең туғандарын яҡын күрергә тырыштым. Үҙеңдеке үҙеңдеке инде ул, ә бына һинең өсөн тәүҙә ят булған иреңдән туғандарын ихтирам итергә өйрәнергә кәрәк, был ғаилә нигеҙен тағы ла ныҡлыраҡ итә.

**Тәнзилә БИКБАЕВА:** Ир туғандарына мөнәсәбәт һәлма килеп сығырға тейеш түгел. Ғөмүмән, был кешенең үҙенән, тәрбиәһенән тора. Әгәр улар һиңә ихлас, яҡшы мөнәсәбәттә икән, ни өсөн быға шундай уҡ һыңғай яуап ҡайтармаҫҡа? Мәҫәлән, Рива ҡоҙағыйымды тәү танышыуҙан уҡ ҡабул иттем. Уның ғәҙеллеге, тура һүҙле булыуы һәм ябайлығы менән үҙе булып ҡалыуы миндә ихтирам уятты. Мин дә ҡоҙағый булараҡ, уның ихтирамын тойоп йәшәйем.

**Рива ИСХАКОВА:** Беҙҙең беренсе тапҡыр осрашыу бик ҡыҙыҡ килеп сыҡты. Улар беҙҙе сәғәт 1-гә саҡырғайны, ә беҙ иртәрәк килдек тә ҡуйҙыҡ. Ҡоҙалар был көтөлмәгәнлектән юғалып ҡалды. Беҙҙең арҡала килеп тыуған хатаны төҙәтергә кәрәк бит инде. Шул бер-ике минут эсендә беҙ берберебеҙгә яраҡлаштыҡ, ике арала торған кәртәне алып ташланыҡ һәм яҡын туғандарға әүерелдек тә ҡуйҙыҡ.

Ҡоҙалар ҙа үҙ-ара бик ныҡ килештеләр. Икеһе лә йырлай, бейей. Ҡоҙа ҡурайҙа бик матур уйнай. Никахтан һуң, мәжлесте дауам итеп, йырлашып ултырҙыҡ. Арабыҙҙа бер генә кеше - ҡоҙағый ғына йырламай икән, тигән һығымта эшләп ултыра инем, иң аҙаҡтан ҡоҙағыйыбыҙ барыбыҙҙы ла уҙҙырып йырлап һушты алды ла ҡуйҙы.

**Тәнзилә БИКБАЕВА:** Ҡоҙа-ҡоҙағый булышыу, бер яҡтан, ҡатмарлы ла, икенсе яҡтан, ябай ҙа ул. Сөнки ул туғанлашыу мәле лә - был аралашыуҙан ҡандар ҡушыла, яңы йәндәр тыуа бит.

**Үҙегеҙ килен булған кешеләр. Ҡәйнә-ҡайны мөнәсәбәтенән һабаҡ алып, хәҙер инде үҙегеҙ ҡәйнә, ҡоҙағый булғас, быны үҙ тәжрибәгеҙҙә ҡулланаһығыҙмы?**

**Рива ИСХАКОВА:** Беҙ тормош иптәшем Марат менән осрашып, дуҫлашып йөрөгән ваҡытта, уның ата-әсәһе беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙы. Уҡытыусы булараҡ, бик нескә күңелле, итәғәтле кешеләр булды улар. Ҡәйнәмде әсәй тип йөрөттөм. Ул шундай матур, мөләйем ҡатын ине. Әгәр миңә ҡәйнә булырға насип булһа, үҙемдең ҡәйнәм кеүек булырмын, тип уйлай инем. Мин иремдең туғандары менән дә аңлашып, матур аралашып йәшәнем.

**Тәнзилә БИКБАЕВА:** Мин дә уҡытыусы ғаиләләһенә килен булып төштөм. Ошо ғаиләнең ябайлығы минең өсөн үҙе бер тәрбиә булды. Ҡайным менән бейемем мине үҙ ҡыҙҙары кеүек күреп яратты, улар минең яҡлаусыларым, һаҡлаусыларым булды. Ейәнсура еренең үҙенсәлекле тәбиғәте тәьҫиренәнме, әллә бүтән сәбәптәнме, унда шул тиклем ихлас һәм ябай халыҡ йәшәй. Йылдар үтһә лә, әле һаман шунда килен булып төшкән саҡтарымды, Байдәүләт, Сирғол ауылы кешеләрен, күршеләрҙе һағынып хәтергә алам. Ейәнсуралар шәл оҫталары булараҡ билдәле бит инде. Килен булып барып төшкәс, бейемемдең торғаны бер дебет фабрикаһына юлыҡтым. Бәй, ундай эште күргәнем дә, башҡарғаным да юҡ, бик ҡатмарлы эш икән ул. Мин дә тырыша торғас, бейемемдән шәл бәйләргә өйрәнеп алдым. Бейемем эшкә уңған булды, һәр нәмәне урын-еренә еткереп башҡара ине, шуға күрә унан ҡалышҡы, уның алдында оятҡа ҡалғы килмәй ине. Ул яҡтарҙа өйҙәр балсыҡ менән һылағас, унһына ла төшөнөп алынды. Бейемем ана шулай мине эшкә өйрәтте. Ҡыҙыма ла, ҡәрсәйең менән минең мөнәсәбәтем ниндәй булһа, бейем

менән килен араһы шундай булырға тейеш, тип үҙебеҙҙең өлгөбөҙҙә кәңәштәр бирәм. Килен менән ҡәйнә, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар араһы үҙе бер мәктәп ул, һин унда балаларыңа үҙ өлгөңдә һабаҡтар бирәһең. Минең ҡыҙым Йәмилә лә хәҙер шул тиклем оҫта бәйләй, был һәләт, моғайын да, уға атаһы яғынан, бейемемдән күскәндер.

**Хәҙер күп кенә йәштәр ҡәйнәһенә - әсәй, инәй, ҡайныһына атай, тип өндәшә. Үҙ атай-әсәйең була тороп, сит кешене был исемдәр менән атау үҙ әсәйеңде рәнйетеү кеүек була түгелме? Шул уҡ ваҡытта ҡәйнәм, бейем, ҡайным тигән һүҙҙәр беҙҙең телмәрҙән төшөп ҡала килә. Һеҙҙең быларға ҡарата фекерегеҙ?**

**Тәнзилә БИКБАЕВА:** Мин туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен асыҡлаусы терминдарҙы атау яғындамын. Мәҫәлән, мин иремдең әсәһенә "бейем" тинем. Был һүҙ миңә бик оҡшай, шундай яғымлы яңғырай ул. Киленем дә хәҙер мине бейем тип йөрөтә. Ҡайынбикә, ҡайнаға, бикәс, балдыҙ, ҡәйнеш тигән терминдарҙы бөгөн йәштәребеҙ онотмаһын ине. Был исемдәр туғанлыҡ ептәрен нығытыуҙа ла бер сара булып тора бит. Унан һуң ҡайһы бер ғаиләләрҙә ағай, апай тип әйтеү урынына исемдәре менән генә өндәшә лә ҡуялар. Был бит араларҙы һыуыта. Мин уҡыусыларыма әсәй тип түгел, әсәйем тип өндәшегеҙ, тип өйрәтәм. Шулай тип әйтһәң, ул тағы ла йылыраҡ, яғымлыраҡ, наҙлыраҡ яңғырай.

**Рива ИСХАКОВА:** Ә мин киреһенсә уйлай инем. Ҡоҙағый минең өсөн ят атама ине. Мин уға Тәнзилә Яҡуповна тип мөрәжәғәт итермен, тип уйлай торғайным. Ә ул миңә ҡоҙағый, тип өндәшкәс, был һүҙгә күнегеп киттем, оҡшай башланы һәм уның шулай тип әйтелергә тейешлеген дә аңланым. Киленем: "Һеҙҙе кем тип йөрөтәйем?", тигәс, "әсәй" тип әйт тинем. Ул ваҡытта был атамаларҙың мөһимлеген аңламайыраҡ әйткәнмендер, был хатаны төҙәтербеҙ инде. Мин дә уға "килен" тип өндәшкәнем юҡ, һәр ваҡыт балам тип кенә йөрөтәм.

**Һеҙ икегеҙ ҙә матур, нәзәкәтле ҡыҙҡатын. Һеҙҙең фекерегеҙсә, матурлыҡ нисек сағыла ул?**

**Рива ИСХАКОВА:** Матурлыҡҡа килгәндә, ул эсеңдә булмаһа, тышыңда ла булмай инде ул. Эсеңдә насар уй ятһа, нисек кенә сибәр йөҙлө булма, һин матур күренмәйәсәкһең. Шундай кешеләр була: бер ҡарауға әллә ни матур ҙа түгел кеүек, ә аралаша башлаһаң, унан да һөйкөмлө кеше юҡ. Бындай кешеләрҙең күңеле саф була һәм ул уның йөҙөн яҡтырта, мөләйем итә.

**Тәнзилә БИКБАЕВА:** Матурлыҡ - ул күңел торошоноң тышҡы матурлыҡ менән ярашыуы. Һинең булмышың эске донъяң тураһында һөйләп тора. Ҡайһы берәүҙәр кейеме менән генә түгел, үҙен тотошо, ҡыланышы менән дә затлылыҡҡа, зиннәткә ынтыла. Әммә кешене күркәмләндереүсе иң төп әйбер - күңел йылылығын онота. Бындай кешеләргә күңел нуры етешмәй. Ә был нур күҙҙәрҙә сағыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әсәйемдең ни өсөн ҡустымды ҡоҙалап һыйлауының серен аңланым шикелле. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар араһындағы иң төп сифат - ихласлыҡ икән. Ошо сифат булһа, мөнәсәбәттәр ысын туғанлыҡ хисенә әүерелә. Ихласлыҡ араларҙы яҡынайта, мөнәсәбәттәрҙе нығыта, үҙеңде лә, донъяңды ла нурлы, ҡотло итә. Әлеге ҡоҙағыйҙар әңгәмәһенән тап ошо йылы ихласлыҡ бөркөлдө лә инде.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*



# ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

## Күренмәгән дошмандарҙан абай бул

**Әгәр намаҙ ҡылғандар араһында иркен аралыҡ ҡалһа, шайтан мосолмандарҙың рәтенә баҫа:** Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Намаҙ ваҡытында рәттәрҙе тығыҙлағыҙ. Фәрештәләр сафтарға теҙелгән кеүек, рәт-рәт булып тороғоҙ. Аралыҡ ҡалдырмайынса, яурындарҙы-яурынға терәгеҙ. Шайтанға аралыҡ ҡалдырмағыҙ, шул уҡ ваҡытта үҙегеҙҙең ҡағылыуығыҙ менән ҡәрҙәштәрегеҙҙе лә ҡыҫырыҡламағыҙ. Аллаһы Тәғәлә намаҙ ҡылыусыларҙың рәтен тулыландырған кешенең етешһеҙлектәрен, гонаһтарын ҡаплай. Кем рәтте боҙа, Аллаһы Тәғәлә шуның эштәрен туҙҙырыр", - тигән (Хәҙистән, Әбү Дауыт).

**Шайтан - насар төштәрҙең сәбәпсеһе:** Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Һеҙҙең кемегеҙ булһа ла матур төш күрһә, был төштөң Аллаһы Тәғәләнән икәнен белһен. Бының өсөн Аллаһҡа шөкөр итһен һәм уны үҙенең яҡындарына һөйләһен. Әгәр насар төш күрһә, быйың шайтандан икәнен белһен, һәм бер кемгә лә һөйләмәһен һәм шайтандың вәсвәсәһенән Аллаһы Тәғәләгә һыйынһын", - тигән (Бохари, Мөслим).

**Шайтан иртәнге намаҙ ҡылыуға ҡаршылыҡтар тыуҙыра:** Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Шайтан йоҡлап ятҡан кешенең башында өс төйөн бәйләй. Төнө буйы уны ошо төйөндәр менән ыҙалатып сыға. Әгәр кеше уянып, Аллаһ тураһында иҫенә төшөрһә, бер төйөн сиселер. Ә ул тәһәрәт алһа - икенсе төйөн сиселер. Ә ул намаҙ уҡыһа - һуңғы төйөн сиселер. Һәм шул осраҡта ул көндө яҡшы кәйеф һәм изге рух менән уҙғарыр. Кире осраҡта ялҡауланып торор һәм насар кәйефтә булыр", - тигән (Мөслим).

**Шайтан йәмәғәттән ҡаса:** Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Кем ожмахҡа эләгергә ынтыла, йәмәғәттә булһын, ысынында шайтан яңғыҙ ҡалыусылар янында", - тигән (Хәҙистән, Тирмизи).

**Шайтан ир менән ҡатын яңғыҙ ҡалыу менән улар эргәһенә килеп етә:** Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Ир кеше ҡатын кеше янында яңғыҙ ҡалмаһын. Юғиһә, уларҙың өсөнсөһө шайтан булыр", - тигән (Хәҙистән, Ибн Маджа).

**Шайтан ялған һәм хата юлдан барыусылар араһында үҙенең ниәтен тормошҡа ашыра:** Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был аятты аңлатыу өсөн тура һыҙыҡ һыҙған һәм былай тигән: "Бына был туп-тура юл, Аллаһ юлы". Һуңынан ошо һыҙыҡтың уң һәм һул яғынан төрлө һыҙыҡтар һыҙған һәм: "Ә былар башҡа юлдар. Һәм улар араһында башында шайтан ултырмаған һәм уның буйлап барыусыны аҙаштырмаған юл юҡтыр", - тип аңлатҡан.

**Шайтан асыуланған ваҡытта яҡын килә:** Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Мин шундай һүҙҙәр беләм, әгәр кеше күңел төшөнкөлөгөнә һәм хәлһеҙлеккә бирелгән саҡта уларҙы әйтһә, барыһы ла үтә. Был "Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-раджим", - тип әйткән. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) быны уның янына асыуланыуҙан йөҙө ҡыҙарған һәм муйынында ҡан тамырҙары бүртеп сыҡҡан хәлдә килгән кешегә әйткән.

**"Әл- Ҡөрси" аятын уҡыған кешегә шайтан яҡынлаша алмай:** "Әбү Хөрәйрәгә төшөндә шайтан килгән һәм: "Кем йоҡлар алдынан "Әл- Ҡөрси" аятын уҡый, Аллаһы Тәғәлә уға һаҡсылар ҡуя һәм таң атҡанға тиклем шайтан уға яҡынлаша алмай", - тигән. Әбү Хөрәйрә был турала Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткәс, ул: "Алдаҡсы булһа ла, ул һиңә дөрөҫөн әйткән", - тигән (Бохари).

**Шайтан аҙан ишетеп ҡаса:** "Ысынында, намаҙға аҙан ишетелгәс, шайтан боролоп ҡаса". Икенсе бер хәҙистә былай тип еткерелә: "Намаҙ ҡылған ваҡытта әт-Тәхийәт уҡығанда һуҡ бармаҡ хәрәкәте шайтанға тимер менән һуҡҡанға ҡарағанда ла нығыраҡ беленә" (Әхмәд). Йәғни, һуҡ бармаҡ был ваҡытта уға тимер сыбыртҡы кеүек тәьҫир итә.

**Рамаҙан айында шайтанға бығау һалына:** Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Рамаҙан етһә, Ожмах ишектәре асыла, Тамуҡ ишектәре ябыла, һәм шайтанға бығау һалына", - тип әйткән (Насаи).

**Ихлас күңелдән тәүбә итеү шайтанды ҡоралһыҙландыра:** "Әгәр шайтан тарафынан булған булған берәй төрлө ҡотҡоға тарыһаң, Аллаһҡа һыйын. Ул ишетеп-күреп тора! Тәҡүәле кешеләргә шайтандан ҡотҡо ҡағылһа, улар (Аллаһты) иҫкә төшөрә һәм бына улар (хаҡ юлды) күрә"(Әд-Әғраф, 7/200-201).

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Бәхет артынан ҡыуһаң - ул ҡаса, бүлешһәң - һиңә ҡайта

Үҙе өсөн бәхет табырға ҡарар иткән бер кеше йәшәгән. Эшҡыуарлыҡ асып, бик байып киткән, әммә был күп көс һалыуҙы талап иткән шөғөл уға артыҡ ҡыуаныс килтермәгән. Шунан ул үҙенең эргәтирәһенә ҡыҙыҡлы әңгәмәсе булырҙай, етеш тормош алып барған бай кешеләрҙе йәлеп иткән. Әммә улар ҙа ул көткәнде бирә алмаған. Ул, үҙе уйлағанса, теләһә кемде бәхетле итә алырҙай сифаттарға эйә булған ҡатынға өйләнгән. Әммә ул да үҙен бәхетле итә алырҙай кешене эҙләгән булған, шуға күрә лә ир менән ҡатын бербереһенең өмөттәрен аҡлай алмаған. Уларҙың балалары тыуғас, ир кеше бына, ниһайәт, бәхетле буласаҡмын, тип уйлаған, әммә балалар ваҡыт, сабырлыҡ һәм иғтибар талап итә, тик ир кеше үҙенең карьераһы һәм күп һанлы дуҫтарынан арына алмаған. Балалар уға тағы ла күберәк яңы бурыстар ғына өҫтәгән.

Ниндәйҙер бер мәлдә был кешегә бәхетте бөтә яуаплылыҡтарҙан азат булғанда ғына табып була кеүек тойолған. Ул үҙенең эшен, дуҫтарын, ҡатынын һәм балаларын ташлап, бер ниндәй хәстәрһеҙ, күңел асып ҡына йәшәп булырҙай ергә ҡасҡан.

Был турала әллә күпме һөйләргә мөмкин, уның аҙағы юҡ. Күңел асыуҙан торған тормош был кешегә эҙләгән бәхетен килтереүе бик шикле. Ул бөтә проблема тышҡы бәйләнештәрҙән генә тора, тип иҫәпләһә, яңы карьера башлап, яңы дуҫтар табып, яңы ғаилә ҡороп, яңынан шул уҡ юлды үтә алыр ине, әммә бәхетте үҙеңдән генә табырға мөмкин булыуын бер ваҡытта ла аңламаҫ ине, бәлки. Ысынында иһә, ул был бәхетте һәр ваҡыт үҙе менән йөрөткән: уның шәхес булараҡ шәхси уникаллеге бәхет менән тулы тәрән ҡоҙоҡҡа оҡшаш була. Әммә был бәхеткә эйә булыр өсөн уны һоҫоп алып, эргәтирәләге кешеләренә һирпеү ҙә еткән, шул саҡта ул уға әйләнеп ҡайтыр ине. Был мотлаҡ эшләнә торған аҙым, уның өсөн "бәхет бүтәндәр менән бүлешкәндә генә үҫеүен һәм артыуын" аңларға кәрәк.

Һәр кемебеҙ ошо кеше урынында була ала. Барыбыҙ ҙа тормош кинәнесен ниндәйҙер тышҡы әйберҙәр бирә, тип иҫәпләйбеҙ. Барыбыҙ ҙа бәхет артынан ҡыуабыҙ, ә ул беҙҙең ҡулдан ысҡына. Әгәр был кешенең тырышлығы аҡса туплау урынына, һәләте менән табылғанды башҡалар менән бүлешеүгә, дөйөм маҡсатҡа хеҙмәт итеүгә йүнәлтелһә, моғайын да, эштә бәхеткә өлгәшә алыр ине. Әгәр ул үҙен тулыһынса дуҫтарына һәм ғаиләһенә бағышларға, уларҙың ҡыуанысын үҙенекеләй күреп ҡабул итергә өйрәнһә, ул бүләк иткән һөйөү үҙенә һис шикһеҙ әйләнеп ҡайтыр ине.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



### 8 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Три толстяка". Мультфильм
06.50 "Одинокая женщина желает познакомиться". Драма
08.10 "Гусарская баллада". Музыкальная комедия
10.00 Новости
10.10 "Бенефис Ларисы Голубкиной"
12.00 Новости
12.20 "Лариса Голубкина. "Я тебя никогда не забуду..."
13.20 "Самая обаятельная и привлекательная". Комедия
15.00 Концерт Патрисии Каас
16.50 "Служебный роман". Комедия
19.50 "ДОстояние РЕспублики". Праздничный выпуск
21.00 Время
21.15 "ДОстояние РЕспублики". Продолжение
23.00 Церемония вручения наград американской киноакадемии "Оскар-2010"
00.50 "Остаться в живых". Сериал
01.40 "Лицо со шрамом". Криминальная драма

### РОССИЯ 1

05.05 "Вас ожидает гражданка Никанорова". Мелодрама
06.40 "Здравствуй и прощай". Мелодрама
08.30 "Спортлото-82". Комедия
10.20 "Деревенский романс". Лирическая комедия
14.00 "Вести"
16.30 "Любовь и голуби". Комедия (В перерыве 17.00 "Вести")
18.50 "Бабы, вперед". Праздничная программа
22.00 "Праздничное шоу Валентина Юдашкина"
00.25 "С глаз - долой, из чарта - вон!" Романтическая комедия
02.25 "Так она нашла меня". Комедия
04.25 "Честный детектив"

### НТВ

05.55 Мультфильм
06.15 "Ларец Марии Медичи". Детектив
08.00 "Сегодня"
08.20 "Одиноким предоставляется общежитие". Лирическая комедия
10.00 "Сегодня"
10.20 "Если наступит завтра". Сериал
13.00 "Сегодня"
16.20 "Если наступит завтра". Сериал. Продолжение
16.00 "Сегодня"
16.20 "Если наступит завтра". Сериал. Окончание
17.05 "Бомжиха". Мелодрама
19.00 "Сегодня"
19.20 "Бомжиха-2". Мелодрама
21.15 "8 Марта с Ириной Аллегровой"
23.20 "Мисс Россия-2010"
01.20 "Боевая элита"
03.10 "Человек вне закона"
05.25 "Сильвестр и Твитти: загадочные истории". Мультсериал

### БСТ

**08.00 "Доброе утро!" Концерт**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.15 Погода**
